✓ *Икенсе ярты йыллыкка гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. "Киске Өфө" гәзитен республиканың һәр ауылында, һәр калаһында алдырып уҡып була: почталарҙа 50665 индексы "Киске Өфө" гәзитенә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 251 һум 64 тин тәшкил итә.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

5-11 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2007 ЙЫЛ

№18 (228)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һуғышта гел еңәбеҙ ҙә...**

ниңә тормошта гел еңеләбеҙ!



2

**Рухи ҡәлғәм, Торатауым,**

йәки изге тауҙағы изге Әүлиә ҡәберенә сәйәхәтебеҙ тураһында




5

**Үҙ эштәреңдең сағылышын...**

халҡың күҙендә күреп йәшәү генә дөрөҫ булыр



8-9

**Иңдәремдә ике ҡанатым-**

думбыра һәм уҡытыусылыҡ



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15





*Башҡорттар - абстракт фекерләүгә һәләтле, зирәк аҡыллы, һөйкөмлө халыҡ, улар сиктән тыш тәьҫирләнеүсән, хыялға бирелеүсән, ҡыҙыу, ләкин тиҙ һүрелеүсән, киң күңелле һәм ҡунаҡсыл халыҡ - уларҙы тик ялҡау ғына таламай һәм иҙмәй.*

Д.Н. Мамин-Сибиряк. "Өмә" хикәйәһе.



ЯУГИР ҺҮҘЕ

# ҒҮМЕР ЯҠТЫ КӨН ШИКЕЛЛЕ,

## тик килә ул бер генә...

### Өмөт

Кистән дә ул юлға ҡарай,
Юлға ҡарай иртән дә,
Һуғыш сыҡҡас утҡа ингән
Ирен көтә икән дә.

Ул киткәндә тажын аҫҡан
Сәскәләй ҡатын ине.
Күкрәгендә толомдары
Ҡабарып ятыр ине.
Күҙ ҡарашы йондоҙ кеүек
Яҡты таратыр ине.

Елдәр өргәс, ҡырау
тейгәс,
Сәсенә ҡылған ҡунған,
Ҡылған ҡунған сәс
бөртөгө
Йылдар үткәс, ҡайғы
өткәс,
Берәм-берәм ҡойолған.
Бит осондағы алманың
Алһыулығы юйылған.

... Ул ҡарашын юлдан
алмай,
Көтә, хәләлен көтә,
Борма-борма юлдар үтеп,
Ҡайтыр тип өмөт итә.

Ире ҡайтмай, ҡапҡа
асмай...
Билдәһеҙ ятып ҡалған,
Тик ҡатыны күңелендә,
Мәңге һүнмәй яныр өсөн,
Өмөт булып тоҡанған.

* * *

Әгәр эшең яман булһа,
Ҡыҫҡа булыр һинең
ғүмер,
Яман эшең ғүмереңде
Яндырыр ҙа, итер күмер.

Әгәр эшең изге булһа,
Оҙонайыр һинең ғүмер,
Изге эшең ғүмереңде
Ҡанатына ултыртыр ҙа,
Киләсәккә ҡарай елер.

* * *

Ғүмер яҡты көн шикелле,
Тик килә ул бер генә,
Яҡты көндәй ғүмереңдең
Ҡәҙерҙәрен бел генә,
Мөхәббәт утында дөрлә,
Бил быуып, бешеп эшлә,
Халҡыңды ҡурсалағанда,
Илеңде арсалағанда
Тик ебеп кенә төшмә!

### Ғүмер

Тынғы белмәй ғүмер аға
Иртән дә, көндөҙ, кис тә,
Уның ярһыу ағыштарын,
Теләһәң, теләмәһәң дә,
Туҡтатып булмай һис тә.

Берәү ғүмерен үткәрә
Шар һуғып йә типтереп.
Икенселәр ерҙә йәшәй
Билен бөгөп, тир түгеп.

Типтергәндәр үткән ерҙә
Донъя ҡала ҡырылып,
Тир түккәндәр үткән ерҙән
Шишмә сыға урғылып.

Файыҡ МӨХӘМӘТЙӘНОВ.

**✓ Тик һуғышта ғына көсләмә икән һуң Рәсәй, йәғни үҙенең башҡаларҙан көслө икәнен иҫбатлар, еңеү парадын үткәрер өсөн генә уға башҡалар менән һуғышырға, ҡан ҡойошорға кәрәкме?**



ИШАРА

# ҺУҒЫШТА ГЕЛ ЕҢӘБЕҘ ҘӘ...

## ниңә тормошта гел еңеләбеҙ?

**Бәйге, яу өсөн яратылған аттар йөк һөйрәргә яраҡһыҙ: улар йөктө йә һабанды яй һәм тигеҙ итеп тартып, алға атлай белмәй, йә һелкетә тартып, йөктө ауҙара, арбаны, ҡамыт-ыңғырсаҡты онтай, йә баш бирмәй, алып каса башлай. Ҡыҫҡаһы, бәйге һәм яу аты менән һабан һөрмәйҙәр, йөк тарттырмайҙар, йөк аты менән бәйгегә йә яуға сапмайҙар. "Өйрәнгән ат яуға яҡшы", тип тә әйткәндәр боронғолар бындай осраҡта.**

Рәсәйҙең мең йыллыҡ тарихын күҙ алдынан үткәргәндә лә, йөк, яу һәм бәйге аттары миҫалына оҡшаш ошондай кинәйәле хәл-күренешкә бихисап миҫалдар килтерергә була бит. Улар үҙҙәре үк Рәсәйҙең артабанғы яҙмышы өсөн оло һабаҡ, ғибрәт булырлыҡ.

"Урыҫтар, урыҫтар, тынғыһыҙ яҙмыш. Ниңә беҙгә көслө булыу өсөн кәрәк һуң һуғыш?" тип йырлай билдәле эстрада йырсыһы Александр Малинин. Ысынлап та, Рәсәйгә көслө булыу өсөн генә кәрәкме икән һуң һуғыш? Бәлки, бында һорауҙарҙы икенсе төрләрәк ҡуйырға кәрәктер:

-Тик һуғышта ғына көсләмә икән һуң Рәсәй, йәғни үҙенең башҡаларҙан көслө икәнен иҫбатлар, еңеү парадын үткәрер өсөн генә уға башҡалар менән һуғышырға, ҡан ҡойошорға кәрәкме?

-Ни өсөн һуғышта һәр саҡ еңеп сыҡҡан Рәсәй тормошта еңелә, сәйәсәттә, сәнәғәттә, мәҙәниәттә, ауыл хужалығында башҡаларҙан артта ҡала һуң?

-Ни өсөн бар донъя дәүләттәре һәм халыҡтары цивилизацияны мәғлүмәт быуатына, өсөнсө мең йыллыҡҡа лайыҡлы йәшәү минимумы менән аяҡ баҫҡанда, меңәр йыл һуҙымында гел бөйөк еңеүҙәргә өлгәшеп килгән, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтарына иң киткес бай Рәсәй халҡының иң ҙур өлөшө хәйерселек сигендә көн күрә?

-Ни өсөн Рәсәй менталитеты тыныс тормош, демократияны дәүләт ҡоролошо менән йәшәү өсөн ҡулайлашмаған һәм яраҡлаша алмай?

-Ни өсөн бар донъяға ҙур афәт менән янаған фашизмды еңеп, Гитлерҙы үҙ өңөндә ҡыйратҡан Рәсәй ошондай еңеүҙе тәьмин итеүсе социалистик идеологияны яклай һәм һаклай алманы?

-Ни өсөн инде үҫеш юлына баҫып, тыныс тормош менән йәшәй башлаған Рәсәй дәүләтселеге үҙендә йәшәгән халыҡтар һәм милли төркөмдәр араһынан тырыша-тырыша "дошмандар" эҙләргә тотона һуң?

-Ни өсөн тыныс тормошто йәшәү рәүеше итеп алған Европа илдәре, Ҡытай, Япония кеүек илдәрҙән беҙ күпкә артта тороп ҡалғанбыҙ һуң?

-Ни өсөн әле лә Рәсәйҙең үҙәк матбуғат сараларында көс ҡулланыу, кеше үлтереү, һуғыш культы иң алғы планға сығарыла ла, тыныс тормош менән йәшәү, ғаилә культы бөтөнләй инкар ителә?

-Ни өсөн Рәсәй меңәр йыл һуҙымында тыныс тормош менән йәшәргә өйрәнә алмай?

-Ни өсөн?..

Бындай "Ни өсөн?" тигән һорауҙарҙы ҡуйып, тағы ла бик күп дәғүәләр килтерергә булыр ине. Әммә быһың менән генә мәсьәләнең асылы үҙгәрмәйәсәк.

Эйе, Рәсәй үҙ тарихында бик күп тапҡырҙар еңеүҙәргә өлгәшкән. Уларҙың иң ҙурҙары: Алтын Урҙаны ҡыйратыу, Наполеонды, төрөктәрҙе еңеү, һәр төрлө интервенттарҙы дөмөктөрөү, Евразияны Гитлер фашизмынан азат итеү, һ.б. Әлбиттә, Рәсәйҙең еңелгән саҡтары ла булған, әммә үҙенең киләсәге, йәшәйеше өсөн хәл иткес яуҙарҙа ул һәр саҡ дошманын ҡыйратып, азатлыҡ яулай алған.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**



### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡайһы саҡта шундай ҙа уйҙар тыуа: Рәсәй халҡын бергә туплар өсөн, тәрән йоҡоһонан уятыр өсөн кәрәкме ул һуғыш? Ысынлап та, ни өсөн тик һуғышта ғына көслөбеҙ һуң беҙ? Ярты донъяны яулаған монгол-татарҙарҙы Уралға 14 йыл һуҙымында индермәй торған, Рәсәй батшалығына ҡаршы ихтилалдарҙың күбеһендә еңеүгә өлгәшкән, Парижды алған, беҙҙекеләргә, башҡорттарға ла ҡағыла бит был хәл-күренеш. Бөйөк Еңеүҙе илебеҙ байрам иткән саҡта ошолар хаҡында уйландым.**

АУЫЛҒА ХАТ

# Йәштәрҙе ҡурсыйыҡ...

## бәйелһеҙлектән!

**Сәләм Өфөнән! Сәләм өфөләрҙән, тип тә яҙып ҡуяйыҡ әле. Шулай итеп эре сирттерә ҡыҙығыҙ, бер дөйөм ятаҡта теркәлеп, рәсми өфөлә булып киттем бит.**

Әсәкәйем, үҙеңә генә төбәп яҙам был хатымды. Тик һин әллә нимәләр уйлап, ҡурҡып ҡуйма. Үҙең менән генә серләшеп алғым килә, дөрөҫөрәге, үҙемде борсоғандар менән уртаҡлашҡым килә.

Бер-ике көн элек әхирәтем Лилиә эргәһенә барҙым (иҫләйһеңме, һөйләгәнем бар ҙа инде бергә укыған Лилиә, Минзәлә, Гүзәлиәләр тураһында, әсәүһе бер фатирҙа торалар). Лилиә егете Рәил менән мине туктатышка тиклем оҙатып, автобуска ултыртып ебәрҙеләр. Икәүләшеп көләшә-көләшә ҡул болғап тороп ҡалдылар. Уларға һоклана-һоклана, күңелле уйҙар менән ҡайтып киттем. Һоҡланмаҫлыҡ түгел шул, әсәй. Лилиә менән Рәилдең дуҫлашҡандарына ике йылдан ашты. Параллель кластарҙа уҡығанда дуҫлашып киткәндәр ҙә, хәҙер инде II курсҡа еттек. Шул тиклем мөнәсәбәттәре матур, шул тиклем әҙәпле тоталар үҙҙәрен. Урамда йөрөгәндә етәкләшкәндәрен дә һирәк күрәм мин уларҙың. Лилиә менән бергә йәшәгән Минзәлә, Гүзәлиәләр ҙә егеттәре менән йылдан артыҡ ашыу дуҫлашып йөрөйҙәр. Улар ҙа бик әҙәпле тота үҙҙәрен. Үҙем дә шуға аптырайым, һине лә аптыратайым, тип һөйләйем быларҙы. Беҙҙең ауылдағы күп ҡыҙҙар менән егеттәрҙең нисек аралашҡандарын үҙең беләһең бит инде. Һин йыш ҡына уларға ҡарап, барлыҡ йәштәр ҙә шулайҙыр инде, тип һығымта яһап ҡуяһың. Ошо фекереңде үҙгәртеү өсөн һөйләйем үҙемдең әхирәтем тураһында.

Эйе, ауылда был насар хәл тарала бара: кискеһен клубҡа сығалар ҙа, клуб артына, йә башҡа берәй аулағыраҡ урынға барып, "йылынып" киләләр, егеттәре лә, ҡыҙҙары ла. Йылыткыстары баштарына һуккас, бейергә лә хәлдәре ҡалмай, тәҙрә төптәренә, мөйөштәрҙәге эскәмйәләргә ҡунаклай улар. Шунан китә "ғашиктарҙың" әҙәпһеҙ ҡыланыуҙары: ҡыҙҙар егеттәренең тубыктарына ултырып алып, туктауһыҙ үбешеүҙәр китә. Уйындан һуң ҡыҙҙарын оҙатыр хәлдә лә булмай егеттәр, үндайҙарын ҡыҙҙар үҙҙәре оҙатып ҡуя өйҙәренә. Эй, әсәй, ошо юлдарҙы яҙған һайын ҡыйыныраҡ, ытырғанысыраҡ.

Бөтә ерҙә лә былай түгелдер, тип ышанғы килә. Шул эскелектән генә бит ул бөтә әҙәпһеҙлек, бөтә боҙоҡлоҡ. Эсмәгән сактарында шул ук ҡыҙҙар төшеп бейергә лә оялып ултыра ул.

Йәштәр тураһында һүҙ сыкһа, "тәрбиәләйек, өйрәтәйек..." тип оран һалалар. Мин был девизды "Ауыл йәштәрен ҡотҡарайык!" тип үҙгәртер инем. Ҡалала шул ук ауылдарҙан килгән йәштәр, студенттар, Аллаға шөкөр, улай ук бәйһеҙ түгел. Ятаҡтарҙа ла, нимә генә тиһәк тә, күҙәтеү, ҡәтғи талаптар бар, яҡтығa өндәүсе йәштәрҙең яҡташтар ойошмалары аяҡка баҫып килә. Ә ауыл йәштәренең хәлен, шөғөлдәрен, иҫәбен төндә һыра, "сәмәй" һатыусылар ғына яҡшы белә.

Эй, әсәй, ошоноң һымаҡ хәлдәрҙе күреп тә, уларҙы үҙгәртеү юлдарын белмәү бик ҡыйын. Тағы ла, рәхмәт әйткем килә, әсәй, һеҙгә. Элегерәк, гимназияға иртә ебәрҙегеҙ ҙә, ауылдағы дуҫтарымдан алыҫлашып бөттөм, тип һеҙҙе ғәйепләп торғайным. Шулай яҡшыраҡ та булған икән. Ауылда ҡалһам, мин дә башҡа тиҫтерҙәрем һымағыраҡ булып китер инемме икән, тип ҡурҡып ҡуям. Әйләнә-тирәңдәгеләр шундай булғас, һеҙҙең генә тәрбиә, тылҡыуҙар тәьҫир итмәҫ ине, тип уйлайым. Үҫмер барыбер тиңдәштәре араһында формалаша бит.

Ярай, әсәй, алдағы ялдарҙа ҡайтам, көтөгеҙ. Атай, айырым хат яҙған, тип үпкәләмәһен инде.

**Әлиә.**

## Н И М Ә ? К А Й Ҙ А ? К А С А Н ?

✓Архангель районында "Рәсәй латыштары конгресы"ның идара йыйылышы булып үтте. Латвия Республикаһынан килгән диаспоралар эштәре буйынса координатор Дайна Лагановска Башҡортостандың аҙ һанлы милләттәрҙең мәҙәни, социаль һәм милли мәсьәләләрен хәл итеү тәжрибәһе менән һокланыуын белдерҙе. Йыйылышта БР мәғариф министры урынбаҫары Артур Сурин катнашты һәм сығыш яһаны. Уның билдәләүенсә, Архангель районында йәшәүсе латыш балаларының барыһы ла туған телен өйрәнә. Сарала шулай уҡ Омск, Красноярск, Смоленск, Санкт-Петербург калаларынан да латыш мәҙәни үҙәктәре вәкилдәре ҡатнашты.

✓Башкортостан профсоюздары Федерацияһы республиканың һауыҡтырыу лагерҙарына путевкалар йәрминкәһе үткәрҙе. Үткән йәйҙә Башкортостанда каланан ситтәге 100 һауыктырыу лагерҙары эшләгәйне һәм уларҙа 54 мең бала ял иткәйне.

✓Баймаҡ районында тағы бер матур йола тергеҙелде: ир-егеттәр йыйындары үткәрелә башланы. Таулыҡай ауылында үткән тәүге конференцияла ир-егеттәр йыйынының район йәмәғәт ойошмаһы барлыкка килде. Ни өсөн бөгөн ир-егеттәребеҙҙең ҡулдары һәләнде? Ниңә улар ғаиләһен карауҙан, балаларын тәрбиәләүҙән ситләште? Ни өсөн улар эскелек һаҙлығына бата бара? Ни өсөн ир-егеттәр ирлекте, лидерлыкты, абруйҙы юғалта? Бына ошо һорауҙар тикшерелде конференцияла катнашыусылар тарафынан. Ҡатмарлы был мәсьәлә тиҙ генә хәл ителмәһә лә, уны хәл итергә ынтылыш, тәүге аҙым яһау һәйбәт.

✓РФ Федераль Йыйылыштың Федерация Советында булып үткән күптән түгелге парламент тыңлауҙары "Дәүләт милли сәйәсәте өлкәһендәге хокуки көйләүҙәрҙе камиллаштырыу тураһында"ғы мәсьәләгә арналғайны. Унда Өфө кала округы Советы депутаты Александр Баутский сығыш яһаны. Депутат Татарстанда башкорттарҙың тарихына кағылышлы махсус әҙәбиәт баҫтырыуҙары, уларҙы республикаға килтереп таратыуҙары һәм башка шуның кеүек Башкортостанға, башкорттарға карата кире караш тыуҙырыуға булышлыҡ итеүсе мәғлүмәттәр таратылыуы айканлы борсолоуын белдерҙе.

✓Быйыл Өфөлә беренсе кварталда финанслауҙың бар сығанаҡтары иҫәбенә 121,5 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән һәм файҙаланыуға тапшырылған. Шәхси йорт төҙөүселәр үҙ иҫәбенә 41,9 мең квадрат метр торлаҡ төҙөгән.

✓ ***Шағирҙарҙың төп маҡсаты һәм тәғәйенләнеше лә шунда: улар кешеләрҙең математик, агротехник, нефтсе һәм бүтән төр һөнәргә эйә булыуынан тыш, образлы фекер һәләтен дә юғалтмауы һағында тора.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ТАРИХ МЕНӘН ШАЯРЫРҒА ЯРАЙМЫ?

## Таллинда Бронза һалдат һәйкәле емерелде

**Байрам байрам булманы быйыл. Улайтып әйтеүемдең үҙ сәбәбе бар. Олораҡтар хәтерләйҙер - 1 май етһә, халыҡ ҡыҙыл әләмдәрҙе үтекләп, ялҡынлы лозунгылар яҙып, юлбашсыларыбыҙҙың портреттарын күтәреп, урамдарға, майҙандарға демонстрацияға сыға торғайны. Трибуналарҙа - партияның урындағы беренсе, икенсе һәм өсөнсө секретарҙары, башҡарма комитет рәйестәре, ветерандар, ижтимағи ойошмалар етәкселәре, бөгөнгө тел менән әйткәндә - элита. Ябай халыҡ аҫта, майҙанда, ҡулдарында әлеге лә баяғы әләмдәр, лозунгылар, портреттар. Тауыш көсәйткестәр аша дәртле музыка яңғырай, ваҡыты-ваҡыты менән коммунистар партияһын, уның етәкселәрен, ошо партия үткәргән сәйәсәтте данлаған орандар ишетелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, байрам гөрләй. Демонстрациялар тамамланыу менән халыҡ тәүге маевкаларҙы иҫкә төшөрөпмө, тәбиғәт ҡосағына ынтыла - шөшлөк ҡура, һыра һемерә. Байрам рәсми булмаған шарттарҙа әле оҙаҡ дауам итә торғайны.**

**Б**ыйыл да ошо көндәрҙә күтәрелде әләмдәр һәм лозунгылар. Әммә уларҙың 1 майға бер ҡыҫылышы ла булманы. Мәскәүҙә һәм Таллинда хеҙмәтсәндәрҙең хоҡуҡтарын яҡларға саҡырған түгел, ә Бронза һалдат һәйкәлен ҡурсаларға өндәгән лозунгылар өҫтөнлөк итте. Шулай итеп, Беренсе май 2007 йылдан алып Рәсәй өсөн Яҙ һәм хеҙмәт байрамы тип кенә түгел, ә "Эстония тарафынан еңелеү" көнө тип билдәләнеүе бик ихтимал.

Эстондарҙы әйтәм, ғәләмәт үҙһүҙле һәм ныҡышмал булып сыҡтылар бит, әй. Рәсәйҙәге Беренсе май байрамын боҙоп, тәки үҙҙәренсә эшләп ҡуйҙылар. Бронза һалдатты алып ташлайбыҙ, тинеләр, бер нәмәгә ҡарап торманылар, алдылар. Уның шулай булырына берәү ҙә, Эстонияла йәшәгән урыҫ теллеләр ҙә, Рәсәй халҡы ла, ышанмағайны, шикелле. Ҡабаланмай ғына, бер йыл буйына халыҡты әҙерләп, парламент составын алмаштырып, кәрәкле закондар ҡабул итеп, ваҡыты килеп еткәс, Бронза һалдат урынлаштырылған майҙанды алдан ҡамап алып, ә һәйкәлде киртәләп һәм япма менән ҡаплап ҡуйып, бер-ике тәүлек эсендә Тынисмяги майҙанындағы зыяратты ла ҡутарҙылар, Бронза һалдатты ла емереп, Таллиндың ситендәге хәрби зыяратҡа күсереп алып киттеләр. Маҡсатлы халыҡ, тимәксемен. Алдарына берәй эш алһалар, тормошҡа ашырмайынса, туҡтамайҙар. Хатта бер нисә мең кешенең Таллинн урамдарында тәртипһеҙлек ойоштороуы, магазиндарҙы, бутиктарҙы, кафеларҙы туҙҙырыуы, хатта ошо тәртипһеҙлектәр ваҡытында әлегә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында 20 йәшлек урыҫ егетенең һәләк булыуы ла туҡтатманы уларҙы. Хатта Рәсәйҙәге Эстония илселегенең "Беҙҙеке"ләр, "Берҙәм Рәсәйҙең Йәш гвардияһы" һәм башҡа ҡайһы бер йәштәр ойошмалары вәкилдәре тарафынан ҡамауға алыныуы, ә илсе Марина Кальюрандтың "Аргументы и факты" гәзите редакцияһында ойошторолған матбуғат конференцияһын үткәреүгә ҡамасаулап маташыуҙары, хатта "Рәсәй тимер юлдары" акционерҙар йәмғиәтенең Эстонияға нефть оҙатыуҙы туҡтатып тороуы, ә илебеҙҙәге сауҙа үҙәктәренең Эстония тауарҙарын һатыуҙан алыуҙары ла ҡамасау булманы уларға. Алырға, тимәк, алырға, емерергә, ҡаҙырға. Тимәк, арттары ныҡ, тип әйтә быңдай осраҡтарҙа беҙҙең халыҡ. Ысынлап та, үҙ нефте лә, газы ла булмаған Эстония тәбиғи ресурстары ифрат күп булған Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе буштан-бушҡа боҙорға алйотмо әллә? Әллә берәү һөсләтеп маташамы уларҙы? Әллә, ысынлап та, Бронза һалдат Таллиндың үҙәк майҙанын биҙәп түгел, боҙоп торамы?

**Э**стония инде күптән СССР тигән илдең бер республикаһы түгел, ә үҙаллы дәүләт. Шулай булғас, теләһәләр, яңы һәйкәл ҡуялар, теләһәләр - иҫкеһен алып ташлайҙар, барыһы ла үҙ ихтыярҙарында, тиеүселәр ҙә булыр. Ризамын. Әммә эш унда ғына түгел. Эстония - Европа Союзы һәм НАТО ағзаһы. Йәғни, халыҡ-ара хоҡуҡтарға тулыһынса эйә. Эстонияның НАТО, ә был хәрби союздың Эстония алдында йөкләмә-бурыстары бар. Был халыҡ-ара ойошмалар үҙ вәкилдәрен яҡларға әҙер тора. Айырыуса, һүҙ Рәсәй менән бәйле була ҡалһа. Үткән аҙнала НАТО-ның, Еврокомиссияның һәм Америка Ҡушма Штаттарының администрацияһы ҡабул иткән белдереүҙәрендә бер тауыштан тиерлек үк бер нәмә ҡабатлана. Рәсәй менән Эстония араһындағы хәлдәрҙең ҡырҡыулашыуына, Рәсәйҙең дипломатик мөнәсәбәттәр тураһындағы Вена конвенцияһын тулыһынса үтәмәүенә айырыуса баҫым яһай улар. Таллиндағы Бронза һалдат һәйкәлен емереүгә килгәндә инде әйтеп үтелгән ойошмалар быны Эстонияның эске эше тип баһаланы һәм Рәсәйгә унда ҡыҫылмаҫҡа тәкдим итте. Ә Рәсәй етәкселегенең "тарихи хәтерҙе мыҫҡыл итеү" һәм "икенсе бөтә донъя һуғыш һөҙөмтәләрен ревизиялау" тигән фекерҙәрен Көнбайыш Европа, хатта ваҡытында фашизмдан айырыуса ныҡ яфаланған Германия ла, бөтөнләй ишетмәне. Әллә ишетмәмешкә һалыштымы?

Асылда, бөгөн Таллиндағы Бронза һалдат һыны ғына емерелмәй, Икенсе бөтә донъя һуғышынан һуң ер шарында эре, иҡтисади үҫешкән һәм хәрби яҡтан көстәре яҡынса бер тигеҙ булған дәүләттәр араһында барлыҡҡа килгән мөнәсәбәттәр юҡҡа сығарыла. Ә яңылары ниндәй булыр һәм улар кем файҙаһына эшләр, уныһы әлегә билдәһеҙ. Һәр хәлдә, ошо арала булған ваҡиғалар - ә уларҙың иҫәбенә Рәсәй менән Грузия, Рәсәй менән Украина, Рәсәй менән Эстония араһындағы мөнәсәбәттәрҙең боҙолоуын индерергә мөмкин, беҙҙең илдең бөтә фронттарҙа ла еңелеүен сағылдыра. Артабан ваҡытында совет ғәскәрҙәре фашизмдан азат иткән Көнсығыш Европа илдәрендә лә ошондай уҡ акцияларҙы күтәргә ҡала. Бер һөҙөлгән башмаҡты бөтә көтөү һөҙә бит.

**А**мерика Ҡушма Штаттары күптән инде үҙен Икенсе бөтә донъя һуғышында еңеүсе тип күрергә теләй. Голливудта төшөрөлгән күп һанлы кинофильмдар быға ишара. Тик быға тиклем СССР-ҙың донъяла биләп торған урыны, көсҡеүәте тарихты нисек кәрәк, шулай төҙәтеп яҙыуға ҡамасаулаһы. Әле иһә үтә уңайлы осор. Былай барһа, бер нисә тиҫтә йылдан Рәсәй уҡыусылары ла үҙ иленең тарихын Америка тарафынан төҙәтелгән дәреслектәр буйынса уҡый башламаҫ тимә.

Тағы ла бер мөһим һабаҡ алырға була был ваҡиғанан. Тарих - үтә һиҙгер материя. Урынынан ҡуҙғатылған һәйкәл ике дәүләт араһындағы мөнәсәбәттәрҙе юҡҡа сығарған кеүек, мәғәнәһе үҙгәртелгән бер генә һүҙ киләсәктә оло дауылға килтереүе ихтимал.

**Таһир ИШКИНИН.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## Бирешмәҫкә!..

**Кеше ғүмерендә һис йырып сыҡҡыһыҙ, ҡотолғоһоҙ кеүек күренгән ваҡиғалар була. Ысынбарлыҡтың нигеҙҙәре тайғаҡ. Бөгөн генә, әле генә сайралмаҫ, ҡыйралмаҫ төҫлө тойолған нәмәләрҙең күҙ асып йомған арала селпәрәмә килеү ихтималлығы бәхәсһеҙ. Яңы ғына донъяға һоҡланып ҡарау мөмкинлегенә эйә кешенең ҡапыл мәйеткә әйләнеүе һирәк күренеш түгел.**

Әммә шуныһы ла хаҡ: хәүеф янаған саҡта кешенең үҙен-үҙе ҡурсалаусы эске көҙрәте лә асылыусан. Тик бик ныҡ ауыр саҡта үҙеңә "Бирешмәҫкә!" тигән бойороҡ биреү зарур.

Донъя мәҙәниәтендә ошондай бер ғибрәтле ваҡиға телгә алына. Имештер, иң таһыл фехтовальщик тигән дан яулаған бер яугирҙең хеҙмәтсеһе була. Көндәрҙең береһендә, яугир юҡта, өйҙө тәртипкә килтереү менән булашҡан хеҙмәтсе бик ҡиммәтле картинаны эшлектән сығара ла ҡуя. Яугирҙең быға асыуы килә.

- Сәнсеп кенә үлтерер инем, ҡулым бармай. Эҫенгәнмен. Шуға күрә, мөмкинлек бирәм: тот бынау ҡылысты, алышабыҙ!

Хеҙмәтсе ҡойолоп төшә:

- Әфәндем, ҡылысты минең тотоп та ҡарағаным юҡ. Һине алышып еңер кеше мин түгел. Үлтерәм тиһәң, алышһыҙ ғына үлтер ҙә ҡуй...

- Юҡ инде, - ти яугир, - алышабыҙ!

- Улайһа, - тип инәлә хеҙмәтсе, - исмаһам, бер сәғәт ваҡыт бир. Минең бик ихтирам иткән аҡһаҡал танышым бар, шуның менән бәхилләшеп киләйем. Тере ҡалмаясағым билдәле бит инде.

Яугир рөхсәт итә. Хеҙмәтсе аҡһаҡал янына килә. Һәммәһен һөйләп бирә. Тегеһе тыңлай ҙа йылмайып ҡуя.

- Борсолма. Был һинең өсөн ҡоллоҡтан ҡотолоу юлы, - ти был хеҙмәтсегә. - Билдәле ки, яугир оҫта фехтовальщик. Һинең өсөн Киләсәк юҡ, еңеү ихтималлығы ла юҡ. Һинең яҡлы булған бер нәмә бар шулай ҙа. Ул - Ғали йәнәптәре Мәл. Шуны файҙалан. Яугир һиңә шул мөмкинлекте биргән. Бирешмә!

- Ниндәй мөмкинлек? Үлеү мөмкинлеген әйтәһеңме?..

- Эш шунда: ул үҙе үлермен тип ҡурҡмай. Уның киләсәге һәм иртәгәге көнөнә хәүеф янамай. Уяулығы ла, тимәк, йоҡлаясаҡ. Ә һинең уяу булмаҫҡа хоҡуғың юҡ, сөнки киләсәгең юҡ. Мәлең генә бар. Шул Мәлде үҙ ихтыярыңа егеүҙән башҡа сара ла юҡ һиңә.

Был икәүҙең алышын ҡарарға тип, күп кеше йыйыла. Хеҙмәтсе шундай ажар алыша, яугир бер саҡ сигенә башлай. Хеҙмәтсе иһә быНың өҫтөнә ташлана ла ташлана. Йәшәү һәм үлем араһындағы ҡыҫҡа ғына Мәлдең үтә бәләкәй дәүмәленә тотош эске таһыллығын тупларға мәжбүр хеҙмәтсе, ҡылысын йән көскә һелтәп ебәргән бер ваҡытта, яугир ауып китә. Хеҙмәтсе ҡылысын уның күкрәгенә терәй.

- Мин һине ярата инем, үлтерергә ҡулым бармай, - ти ул хужаһына.- Еңелеүеңде таныйһыңмы?

Яугир ғүмерендә беренсе тапҡыр еңелеүен таный.

Меңәрләгән кеше быны күреп, телһеҙ ҡала.

- Хәҙер инде мин һинең хеҙмәтсең түгел, - ти еңеүсе. -Әммә үҙемдең кем икәнлегемде танырлыҡ мөмкинлек биргәнең өсөн рәхмәт һиңә!

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Май байрамы көндәрендә 1,8 миллион рәсәйле төрлө байрам сараларында ҡатнашҡан. Төрлө фирҡәләр, хәрәкәттәр һәм профсоюз ойошмалары ойошторған митингылар 1132 ҡала һәм ауылда үткән. Мәғлүмәттәр буйынса, быйыл быңдай сараларҙа былтырғы менән сағыштырғанда 500 меңгә күберәк кеше ҡатнашҡан.

✓ Тарихсы, юрист, әҙәбиәтсе, скульптор, рәссам Рафаэль Зиннуровтың "Китап" нәшриәтендә "Башҡортостан юлы" тип аталған уникаль китабы баҫылып сыҡты. Эпик поэма рубаи жанрында яҙылған һәм башҡорт халҡының бар үткән тарихы тураһында һөйләй. Төп тема - Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуы.

✓ Май аҙағында Өфөлә еңел һәм текстиль сәнәғәт тауарҙары һәм ҡоролмалары "Уралегпром- 2007" VII регион-ара махсуслаштырылған күргәҙмәһе үтәсәк. Маҡсаты: өҫ һәм аяҡ кейемдәре етештереүсе коллективтарҙың ижади инициативаларына ярҙам итеү генә түгел, ә уларҙың тауарҙарын Ватан һәм сит ил баҙарҙарына тәҡдим итеү ҙә.

✓ 1 майҙан Башҡортостанда күмәртәләп балыҡ тотоу тыйылды. Бөтөн балыҡсылыҡ промыслалары балыҡ тотоуҙы туҡтатты. Һәүәҫкәр балыҡсылар ярҙан ултырып ҡына ҡармаҡ менән балыҡ тота ала, ә йылға буйлап кәмәләрҙә һәм башҡа йөҙөү транспортында йөрөү шулай уҡ тыйыла. Тыйыу 40 көн дауам итәсәк.

✓ Бөрйән районында тәүге күсмә урман аукционы булып үтте. Аукционға барлығы 77 ғариза бирелгәйне. Быйылдан урман аукциондары үткәреү даимиға әйләнәсәк. Урман фонды участкаларын файҙаланыуға биреүҙең был ысулы яңы Урман кодексында ҡаралған.

✓ Журналистарҙың "Владислав Третьяк кубогы" Бөтә Рәсәй шайбалы хоккей ярыштары тураһындағы иң яҡшы яҙмаларына үткәрелгән конкурста "Вечерняя Уфа" гәзитенә алтын миҙал, кубок, ә журналист Рәшит Әюповҡа махсус бүләк тапшырылды.

✓ Роспотребнадзорҙың Башҡортостан идаралығында хәбәр итеүҙәренсә, быйыл да геморрагик биҙгәк сире буйынса хәл хәүефле булмаҡсы. Быйыл тәүге кварталда уҡ был сир менән сирләүҙең 191 осрағы теркәлгән, был былтырғы менән сағыштырғанда 20 процентҡа күберәк. Ауырыу осраҡтары бигерәк тә Благовещен, Мишкә, Салауат, Борай, Нуриман, Аҫҡын, Яңауыл һәм Кушнаренко районнарында юғары. Быйыл республика бюджетынан 8 мең га, Өфө ҡалаһы бюджетынан 4500 га ерҙе эшкәртеүгә аҡса бүленгән.

✓ **Һуңғы йылдарҙа ата-әсәләрҙең балаларын гимназия, лицейҙарға уҡырға бирергә ынтылыуы ҡыуандыра. Юғары уҡыу йортона инеү мөмкинлеге булыуы, гимназия, лицейҙа белем алыу үҙен һәр ваҡыт аҡлай.**



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ТАШҠЫНДАР ҡурҡыу һалды

**Ҡыш аҙағы, яҙ башына ҡар бик күп яуҙы. Был үҙе үк быйыл ташҡындар буласағына ишара ине. Ысынлап та, раҫҡа сыҡты. Күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, 30 апрелдә Ағиҙел йылғаһының Өфө эргәһендәге һыу кимәле ете ярым метрға тиклем күтәрелгән. Был көндө йылғаның бер ярынан икенсе ярҙы күреү мөмкин дә түгел ине - томан ҡатыш еүеш ҡар офоҡ ситен тулыһынса ҡаплап алғайны. Аҙаҡ бер туҡтауһыҙ ямғырҙар яуа башланы. Баш ҡаланың Ленин районында - 272, Киров районында 90 шәхси йортҡа һыу баҫыу ҡурҡынысы янай ине. Нижегородка микрорайонында һыу уның биштән бер өлөшөн баҫты. Ҡурҡыныс янаған урамдарҙа электр селтәрҙәренең эше ваҡытлыса туҡтатылды.**

● Башҡортостан Республикаһы Тәбиғәттән файҙаланыу, урман ресурстары һәм тирә-яҡ мөхитте һаҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, 3 майға Ағиҙел йылғаһының Өфө эргәһендәге кимәле 824 см ( + 32 см), Ҡариҙел йылғаһының Шаҡша ҡасабаһы эргәһендәге кимәле - 861 см ( + 19 см), Дим йылғаһының Бочкарево ауылы эргәһендәге кимәле 485 см (+ 29 см.) тәшкил итте.

● Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы хәбәр итеүенсә, республикала 577 өй һәм шәхси хужалыҡ һыу аҫтында ҡалған. Архангел, Ейәнсура, Иглин, Ҡырмыҫҡалы райондарында, Стәрлетамаҡ ҡалаһында, Өфөнөң Киров һәм Ленин райондарында шәхси йорттарҙы һәм баксаларҙы һыу баҫҡан.

● Башҡортостан метереологтарының хәбәр итеүенсә, май башы ямғырлы һәм һалҡын буласаҡ. 9 майҙа ғына көн аяҙып, бер аҙ йылытыуы ихтимал. Дөйөм алғанда, майҙың тәүге яртыһында һауа температураһы 10-12 градус йылынан артмаясаҡ. Уның карауы, майҙың икенсе яртыһында термометр шкалаһы плюс 26 градуска тиклем күтәреләсәк. Май айы ямғырлы һәм һалҡын килгән йылда уңыш мул була, ти халыҡ.

## БЕЛЕМ УСАҠТАРЫ саҡыра

**Һуңғы йылдарҙа ата-әсәләрҙең балаларын гимназия, лицейҙарға уҡырға бирергә ынтылыуы ҡыуандыра. Юғары уҡыу йортона инеү мөмкинлеге булыуы, баланың фекерләү кеүәһен үҫтереү йәһәтенән былдай гимназия, лицейҙа белем алыу үҙен һәр ваҡыт аҡлай. Балаһының киләсәгенә битараф булмаған ата-әсә быны иҫәпкә алырға тейештәр.** Мәҫәлән, оҙаҡламай **Республика башҡорт лицей-интернаты** VII синыфҡа малайҙар ҡабул итә башлаясаҡ. Имтихандар 13 майҙа 11.00 сәғәттә Өфө ҡалаһы, Ҡулса урамы, 74 адресы буйынса, шулай уҡ ("Техучилище" туҡталышы, Колхоз баҙары районы), Баймаҡ мәктәп-интернатында, Белорет ҡалаһының 22-се башҡорт гимназияһында, Дәүләкән мәктәп-интернаты, Учалы ҡалаһының 12-се урта мәктәбе, Аҡъярҙың 2-се урта мәктәбе, Аскарҙың 2-се урта мәктәбе, Оло Устьикин 1-се лицейы, Иҫәнғол 1-се урта мәктәбендә, Малаяҙ башҡорт гимназияһы, Мәсәғүт Республика лицей-интернатында, Морак башҡорт гимназияһында, Иҫке Собханғол урта мәктәбендә, Юлдыбай урта мәктәбендә уҙғарыласаҡ. Егеттәргә үҙҙәре менән тыуыу тураһында таныҡлыҡ һәм авторучка алыу талап ителә. Тулыраҡ мәғлүмәтте **(3472) 42-18-32** телефоны буйынса алырға мөмкин.

**Әйткәндәй...**

**Балағыҙҙың төплө белем алыуҙан тыш дәрестән һуң оҙайтылған көн төркөмөндә, спорт секцияларында, төрлө түңәрәктәрҙә, бушлай музыка мәктәбендә шөғөлләнеүен теләйһегеҙме? Улайһа, 140-сы башҡорт гимназияһы (Мушников урамы, 5/2) ишектәре һеҙҙең өсөн асыҡ. Өҫтәүенә, гимназия янындағы һауыҡтырыу үҙәгендә баланың һаулығын нығытыу мөмкинлеге лә бар. Һорауҙар менән 238-82-51 йәки 238-84-30 телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә була.**

... ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# Байрамға... лайыҡлы әҙерлек

**Өфө ҡала ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы кәңәшмәлә Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына арналған мәҙәни саралрға әҙерлек һәм социаль обьекттар төҙөлөшө барышы мәсьәләләре ҡаралды.**

Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Миҙхәт Мәмбәтов мәҙәни-масса һәм рәсми саралар концепцияһы тураһында бәйән итте. Рәсми тантаналар, ғәҙәттәгесә, Дуҫлыҡ монументына сәскәләр һалыуҙан башлана. "Башҡортостан - баллы ил" тип исемләнгән байрам концерты бик сағыу тамашаға әйләнмәксе. Ағиҙел яры буйлап киң йәйелдерелгән "бал ҡаласығы" республикала йәшәгән халыҡтарҙың милли йолаларына ярашлы биҙәләсәк. Шулай уҡ бында Рәсәй эстрадаһы йондоҙҙарының сығышы өсөн сәхнә һәм Өфөнөң тәүге йәҙән сағылдырған боронғо ағас ҡәлғә төҙөү, лазерлы шоу һәм байрам фейерверкын эшләү ҡаралған. Ҙур байрам программаһы Ленин исемендәге һәм Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһенең мәҙәниәт һарайы янындағы майҙандарҙа ла дауам итәсәк. Ә балалар һәм үсмерҙәр коллективтрының "Тылсымлы йондоҙсоҡтар" тип аталған Гала-концерты Нефтселәр мәҙәниәт һарайы янындағы майҙанда үткәрелә.



Дуҫлыҡ йорто ҡалҡып килә

Байрам ҡунаҡтарының Өфөлә ағас ултыртыуҙа ҡатнашыуҙары ла күҙ уңында тотола. Сквер булырмы ул, аллеямы, хәҙер уның өсөн айырым майҙан билдәләнә. Миҙхәт Мәмбәтов әйтеүенсә, юбилейға арналған сувенирҙар һәм нәшриәт баҫмалары әҙерләү ҙә әүҙем алып барыла.

Юбилей төҙөлөштәренең эш барышы менән хакимиәт башлығының беренсе урынбаҫары Рәмил Хәлимов таныштырып, "Уфа-арена" боҙ һарайының ҡыйығын һәм технологик ҡоролмаларҙы монтажлау башланыуын һәм һарайҙың эсен төҙөкләндереү эштәре дауам итеүен бәйән итте. Ул, Халыҡтар дуҫлығы йортоноң фасадын эшләп бөтөү һәм тирә-яғын матурлау ҙа хәҙер төп бурыстарҙың береһе, тине. Рәмил Хәлимов әйтеүенсә, Халыҡтар дуҫлығы йорто Боҙ һарайынан алдараҡ файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Шулай уҡ аэровокзалды ла майҙа төҙөкләндереп бөтөү планлаштырылған. "Аҡбуҙат" ипподромын төҙөкләндереү, тимер юл вокзалының ер аҫты юлдарын реконструкциялау ҙа уңышлы бара.

**Шулай итеп, Өфө оло байрамға әҙерләнә. Павел Рюрикович әйтеүенсә, һуңғы 20 йыл эсендә Өфөлә әлеге кеүек ҙур төҙөлөш эштәре башҡарылмаған булмаған.**

**Булат ЮЛБАРИСОВ.**
**"Башинформ".**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП

# Кемдәр хайран итер ҡунаҡтарҙы?

**Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгән көндәрҙә республика ҡунаҡтарын нисек итеп таң ҡалдырырға була? Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән кәңәшмәлә сувенир етештереүселәр һәм сауҙа вәкилдәре нәҡ ошо һорауға яуап эҙләне. Был әҙерлек бынан бер йыл алда уҡ башланды һәм байрам хөрмәтенә әҙерләнгән продукция сауҙа нөктәләрендә күренә лә башланы.**

- Төп иғтибарҙы сауҙа нөктәләренә йәлеп итергә кәрәк, - тине Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Гәлиуллин. - Бөгөндән үк ҡала ҡунаҡтары ла, Өфөлә йәшәүселәр ҙә байрам кәйефен тойһон. Бының өсөн магазин витриналары матур итеп байрамса биҙәлергә, һатыу итеү урындары сүп-сарҙан таҙартылып, күҙҙең яуын алып торорға тейеш. Хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өсөн сауҙа нөктәләрендә күҙәтеү камералары ҡуйырға кәрәк.

Кәңәшмәлә 130 сауҙа предприятиеһы вәкиле һәм сувенир етештереүсе 20 ойошма ҡатнашты. Һуңғыларының продукцияһы ошо уҡ көндә күргәҙмәлә күрһәтелде. Башҡортостан "Китап" нәшриәте, "Белая река" сауҙа йорто, шулай уҡ "Информреклама", "Слово" нәшриәттәре лә үҙ тауарын тәҡдим итте.



"Ағиҙел" художество берекмәһенең директор урынбаҫары Флүрә Джакелиҙың әйтеүенә ҡарағанда, был данлыҡлы берекмә төрлө сувенирҙар етештерә башлаған да инде. Улар араһында һәр кем һатып алырҙайы менән бер рәттән, бик ҡиммәтле, эксклюзив рәүештә эшләнгәндәре лә бар. Коллектив бүләктәрҙең йөҙ төрлөһөн етештерәсәк.

- Юбилейгә арналған тауарҙар етештереүселәр менән һатыу итеүселәр араһында бөгөндән үк ике яҡ өсөн дә файҙалы булған килешеүҙәр төҙөргә кәрәк, - тине Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары идаралығы начальнигы Ирина Рублева. - Юҡһа, юбилей айканлы сауҙаға сығарылған продукцияның күбеһе бөгөн Мәскәү етештереүселәренеке.

**Елена МУЖАЙЛОВА,**
**"Башинформ".**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

☑ Байрам көндәрендә Өфө ҡала округы Советы бинаһы алдындағы майҙанда өс сәйәси акция булып үтте. Ленин майҙанын бер-бер артлы профсоюздар, коммунистар һәм "Ғәҙел Рәсәй" тигән яңы фирҡә ағзалары биләне. Уларҙың барыһын да берләштергән талап бер ине: пенсия күләмен күтәреү һәм йәшәйеш сифатын яҡшыртыу. Мәғлүмәттәр буйынса, майҙанға биш-алты мең кеше йыйылған. Йөҙәрләп милиция хеҙмәткәре тәртип һағында торған. Бер ниндәй ҙә ғәҙәттән тыш хәлдәр, тәртип боҙоуҙар булмаған.

☑ Был көндәрҙә үткән митингыларҙағы төп талап "Пенсияны күтәрергә" булды. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, ете йыл эсендә пенсия дүрт тапҡырға, йәғни ике меңдән ашыу һумға арткан. Күптән түгел Рәсәй Президенты үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә быйыл пенсияны 65 процентка арттырасаҡтары тураһында хәбәр итте.

☑ Өфөлә йәйге кафелар эш башланы. Быйыл ҡала округы хакимиәте тәүге тапҡыр үткәргән аукцион һынауын барлығы 14 йәйге кафе ғына үтә алған, улар үҙ ишектәрен асты ла инде. Ҡала властары йәйге кафе ойоштороу тәжрибәһе булған стационар дөйөм тукланыу предприятиеларына өҫтөнлөк бирҙе. Бынан тыш, ундай кафеларҙа элеккесә һыра һәм уға закуска ғына түгел, ә төрлө бешерелгән ҡамыр аштары һәм туңдырмалар ҙа һатылырға тейеш.

☑ И. Якутов исемендәге паркта ла яҙғы-йәйге сезон асылды. Парк тәртипкә килтерелгән, аттракциондар эшләй, шәмбе һәм йәкшәмбелә төрлө мәҙәни саралар, конкурстар үтәсәк. Байрам теләһә ниндәй һауа шарттарында ла үтәсәк, тип ышандыра парк етәкселәре.

☑ Эшһеҙлек кәмей бара. 1 апрелгә Өфөлә 7325 кеше эшһеҙҙәр статусында булған. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда байтаҡҡа кәмерәк.

☑ 12 майҙа Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты "Приозерный" спорт-һауыктырыу комплексында (Баязит Бикбай урамы, 13) баш ҡала предприятиелары һәм ойошмалары йәштәре араһында мини-футбол буйынса турнир үткәрә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ҠӘҘЕРЛЕЛӘРЕМ...

## хәтирәләремдә һаман

**Мин, Хәйбуллина Миңдинур Мәғәсүм ҡыҙы, хәҙерге Баймаҡ районы Түбәнге Таһир ауылында тыуып үҫтем. Ҡатмарлы осор кешеһе булараҡ, һәр төрлө ауырлығын-михнәтен дә, бер туйғансы ашарға ине, тип хыялланған көндәрҙе лә аҙ кисермәнем. Ғүмеремдең күпселек өлөшө Әбйәлилдә үтте, әммә Баймаҡ ерендә ҡалған туғандарымды, тыуған төйәгемде онота алманым. Матур төш һымаҡ, һәр саҡ хәтеремдә һаҡланды, күҙ алдында торҙо улар. Әле лә юл төшөп, Таһирға барып сығырға тура килгәндә, Һаҡмарым, ғәзиз ерем гүзәллегенә хайран ҡалып, ҡәһәрле һуғыш урлаған бала сағымды, йәшлегемде иҫкә төшөрөп, ялан-ҡырҙарыма, тау-урмандарыма бер һоҡланып, бер моңайып, оҙон-оҙаҡ һағышланып торам. Тыуған ергә, тыуған тупраҡҡа ҡайтып тороу зарур, сөнки ата-әсәмдең, туғандарымдың, яҡын кешеләремдең изге рухтары ошонда мәңгелек тыныслыҡ тапҡан, һөйәктәре ошо ер ҡуйынында ята. Тыуған төйәккә ҡайтып, уларҙы иҫләп, беҙ сауап алабыҙ. Түбәндәге хәтирәләрем ҡәҙерлеләрем хаҡында. Хәйер, улар хаҡында ғына микән...**

Һуғыш сығыр алдынан, яҙ көнө ауыл гөрләп торҙо, күтәренке рух, эшлекле кәйеф хөкөм һөргәйне. Әле лә хәтеремдә: сәсеү тамамланған осор ине, бер көн киске ашҡа ултырғанда ғына, Зөлфәр ағайымды ашығыс рәүештә кәнсәгә саҡырттылар. Әсәйемдең: "Әй әттәгенәһе, ашын ашап та өлгөрмәне исмаһам", - тип, үкенес белдереп ҡалғаны һаман ҡолаҡ төбөндә яңғырап тора һымаҡ. Белһәк икән шунда ҡәҙерле ағайымдарҙың тағы күпме әсәй әҙерләгән аш-һыуҙан, атай йорто йылыһынан, башҡа уңайлыҡтарҙан мәхрүм ҡаласағын...

Иртән тороуға кәнсә алдында халыҡ ҡайнай ине. Оҙаҡламай дүрткел башлы машина килеп туҡтаны. Уға бик күп ир-ат тейәлде. Ололар тыйнаҡ ҡына илаша, йәш-елкенсәк һағайышып, шымып ҡалған, әле бер ни аңламаған бала-саға аяҡ аҫтында буталышып зыҡ ҡуба. 9 йәшлек мин дә улар араһында. Беҙгә ирмәк: тәү тапҡыр машина - шайтан арбаһын - күрәбеҙ бит. Меркулов фамилиялы мордва һағышҡа зар өҫтәп, өҙҙөрөп баянда уйнай. Кемдер уға ҡушылып йырлап маташа, әммә йыры килеп сыҡмай. Машина ҡуҙғалғас, атайым менән әсәйем йөҙҙәре ҡара көйөп, уның артынан эйәреп китте, миңә барып йөрөмәҫкә ҡуштылар. Беҙ өймәкләшеп ҡалҡыуыраҡ урынға күтәрелеп ҡырҙан ғына ҡарап торҙоҡ. Ауыл осона етәрәк туҡталған машина янында кемдер ҡысҡырып телмәр тотто, һуңынан шартылдатып һауаға мылтыҡтан аттылар. Өйгә ҡайтҡас, атайым:

“Урыҫ ғәҙәте буйынса ҡыландылар, хәйерлегә булһа, ярай ҙа”, - тип, оло риза-һыҙлыҡ белдерҙе. Тиктомалға һауа тетрәндереүҙе әсәйем дә оҡшатманы.

Аҙаҡ белдем: минең өсөн Бөйөк Ватан һуғышы ана шулай башланған икән. Ә теге машинала үҙҙәре теләп һуғышҡа китеүсе тәүге ауылдаштарым булған. Зөлфәр ағайым да улар рәтендә ине. Ул, запастағы офицер-танкист, йәш һалдаттарҙы уҡытып, һуғыш серҙәренә өйрәтеп ятты. Тәүге осорҙа Львов, Харьков ҡалаларынан хаттар килгеләне. Уларҙың: "Ваҡыт тар, ифрат ауыр, баш осонда ҡоҙғондар уйнай, борсаҡ яуа", - тигән юлдары хәтерҙә уйылып ҡалған. Аҙағыраҡ, япондар ҡотороНа башлағанда, ағайымды Көнсығыш фронтына күсерҙеләр. Хаттарын ул Чита, Хабаровск ҡалаларынан яҙҙы. Зөлфәр ағайым 1946 йылдың март айында ҡайтып төштө. Ҡайтҡас та, Асҡарға эшкә урынлашты.

Икенсе ағайым Зөлҡәр 1939 йылда фин һуғышында ҡатнашып, бер ҡулын ҡалдырып ҡайтҡайны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ауыр эштәрҙән һис ситтә ҡалманы. Хатта һыңар ҡуллап бесән сапты, кәбән ҡойҙо, һуғыш осоронда колхозда етәксе булды.

19 йәшлек Әхтәм ағайым һуғышҡа 1941 йылдың көҙөндә китте. Әсәйем: "Мыйығы ла сыҡмаған малай ғына бит әле, мылтыҡ тота белмәй аҙаплаНыр инде", - тип, ихлас борсолоп иламһырап ҡалды. Ә 1942 йылдың февралендә йән өшөтөп, "Хәбәрһеҙ юғалды", тигән ҡағыҙы килде. Барыбыҙ ҙа ныҡ ҡайғырҙыҡ. Шулай ҙа әсәйем ышанманы. Тағы ике ай үтеүгә, ҡайғы-хәсрәттәребеҙҙе таратып, үҙенән өсмөйөшлө хат килеп төштө. Б а ҡ т и һ ә ң , атакаға күтәрелгәндә, аяғынан ауыр яраланып, иҫһеҙ йығылған килеш ятып ҡалған икән. Буран башланып, уны күмеп китә. Атыш башланғас, санитарҙар уның шинель осон шәйләп, табып ала һәм әжәлдән ҡотҡара. Госпиталдә өс ай дауаланғандан һуң, йәнә фронтҡа китә, йәнә яралана. 1943 йылдың буранлы мартында ике ҡултыҡ таяғына таянып ҡайтып инде ул. Бер аяғының һөйәге селпәрәмә килгән, тубыҡтан түбәндә ярайһы уҡ ҡурҡыныс булып өңөрәйеп тора ине. Көн дә кис еңгәйем менән бергәләп урауын алмаштырҙыҡ.

Ағайымдың иң олоһо Барый ике күҙҙән дә һуҡыр ине, әммә ошоно сәбәп итеп, тик ятманы, колхозға, илгә, еңеү хаҡына ҡулынан килгәнсе ярҙам итте. 1870 йылда тыуған, инде етмеште уҙған атайым, Хәйбуллин Мәғәсүм Абдразаҡ улы, колхозға йүкәләп мөйәт ятыуҙан мандый алмай, 1942 йылдың 6 сентябрендә донъя ҡуйҙы.



Атай вафатынан һуң йәшәйешебеҙ бөтөнләй ауырлашты, беҙ ғаиләбеҙ менән ат урынына егелдек. Хәйер, бер беҙ генәме, барыһы ла шул хәлдә ине. Шулай ҙа тормош ауырлығына зарланып, бер кем дә үҙен аяп, төшөнкөлөккә бирелеп торманы. Мәктәптә уҡып ҡына йөрөгән малай-ҡыҙҙарҙы ла оло маҡсатлы, мәкер дошманға ҡарата нәфрәт менән янған, уны еңеү хаҡына барыһын эшләгән, һәммәһенә түҙгән шанлы быуынға әйләндерҙе беҙҙе һуғыш. Бөтәбеҙҙә лә тик бер маҡсат: еңеү көнөн тиҙерәк яҡынайтыу. Ас-яланғас булһаҡ та, барыһына өлгөрөргә тырыштыҡ, ал-ял белмәнек. Бер туған апайымды Ағиҙелгә ағас эшенә ебәрҙеләр. Ике йыл шунда йөрөнө, һалҡын тейҙереп, тамағы шешеүҙән Сүләйә станцияһында үлеп ҡала. Был хәл 1947 йылда була.

Үҙем ошо йылда ете синыфты тамамлап, Темәс башҡорт педагогия училищеһына уҡырға индем. Өсөнсө курсты тамамлауға, әсәйем ныҡлап ауырып китеү сәбәпле, уҡыуҙы ҡалдырырға тура килде. 1951 йылдың 18 сентябрендә әсәйем Хәфиҙә Юныс ҡыҙы ла яҡты донъя менән хушлашып, мәңгелек йортона күсте. Беҙ үкһеҙ етем ҡалдыҡ. Ағайымдарға рәхмәтлемен. Ауыр

***Тормош ауырлығына зарланып, бер кем дә үҙен аяп, төшөнкөлөккә бирелеп торманы. Мәктәптә уҡып ҡына йөрөгән малай-ҡыҙҙарҙы ла оло маҡсатлы, мәкер дошманға ҡарата нәфрәт менән янған, уны еңеү хаҡына барыһын эшләгән, һәммәһенә түҙгән шанлы быуынға әйләндерҙе беҙҙе һуғыш. Бөтәбеҙҙә лә тик бер маҡсат: еңеү көнөн тиҙерәк яҡынайтыу. Ас-яланғас булһаҡ та, барыһына өлгөрөргә тырыштыҡ, ал-ял белмәнек.***

мәлдә бәләкәс ҡустым менән икебеҙҙе яҙмыш ҡосағына ташламанылар. Ҡайғы-хәсрәттәрен дә, шатлыҡ-ҡыуанысын да бергәбергә уртаҡлаштылар, шөкөр.

Өс ағайым да шәп ҡурайсы булды. Ә Барый ағайым өҫтәүенә матур итеп өзләй ине. Ул 80 йәшен тултырып, донъя ҡуйҙы. Улы Әхмәткәрим бөгөнгө көндә Баймаҡ ҡалаһында йәшәй, эске эштәр бүлегендә эшләп йөрөй.

Ауылда һуғыштан мираҫ булып ҡалған юҡлыҡ, фәҡирлек, аслыҡ оҙаҡ ҡына хөкөм һөрҙө. Кешеләр аслыҡтан шешенеп ятты, тифтан, башҡа сирҙән себен урынына ҡырылды. Һауып һөтөн эсер һыйыры булғандарҙың ғына йәшәүгә өмөтө бар ине. Улар бирешмәне. Күптәр, үҙҙәренән өҙөп, к ү р ш е - к ү л ә н е , яҡындары менән бүлеште.

Зөлфәр ағайым, ут эсендә йөрөмәһә лә, һаулығы ныҡ ҡаҡшаған ине. Туң ерҙә, еүеш окоптарҙа ятыу, аслы-туҡлы көн итеп, йән аҫрау үҙенекен итмәй ҡалмағандыр. Ул илле ике йәшен дә тултыра алмай, үпкә сиренән вафат булды. Әхтәм ағайым да фронтта алған йәрәхәттәренән ғүмере ахырынаса яфа сикте. Тулыһынса төҙәлә алмай, быуындары шешенеп үлеп ҡалды.

Ағайымдарҙың бөгөнгө матур тормошто, әле һуғыш ветерандары күргән ҡәҙер-хөрмәтте күреп өлгөрә алмауҙарына йөрәк һыҙлай. Уларҙы хәҙер Еңеү көнөндә иҫкә алып, рухтарына изге доғалар бағышлайһы ғына ҡала. Әрүахтарға аят-доғанан башҡаһы кәрәкмәй. Илем-ерем, тип изге һуғышта баш һалған шаһиттәр туранан-тура ожмахҡа эләгә, ти. Иманым камил, ағайҙарымдың да урыны йәннәттең иң түрендәлер...

Ана шулай, бөтә Бөйөк ил, бар халыҡ менән берлектә ауылдаштарым да хәтәр мәлдә юғалып ҡалмай, изге эште аҙағынаса еткерҙе - дошманды дөмөктөрөп, быға тиклем тарихта булмаған Бөйөктәрҙән Бөйөк Еңеүҙе яуланы. Быҫҡып түгел, янып йәшәнек беҙ. Үткән һуғыштың бөгөнгө кеше ышанмаҫлыҡ ауырлыҡтарын, беҙ күргән юғалтыуҙарҙы, кисергән мохтажлыҡтарҙы, мәхрүм ителеүҙәрҙе балаларыбыҙға, ейәндәребеҙгә, унан һуңғы быуындарға ла күрһәтмәһен Хоҙай.

**Миндинур ХӘЙБУЛЛИНА,**
**педагогик хеҙмәт һәм тыл ветераны.**
Әбйәлил районы.

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С




### Осло ҡаялар

Төркиәнең Каппадокия тауының бер үҙәнен осло ҡаялы бағаналар майҙаны биләй. Был ғәжәйеп ландшафт Эрджияс-Даг вулканының һыуынған туфаһын көслө ел һәм дауыллы ямғырҙар шымартып "юныуҙан" барлыҡҡа килгән. Ҡәләм, конус, манара, пирамида һәм башҡа үҙенсәлекле формалы был бағаналарҙың һаны 20 меңдән ашыу.

Гректар Монс Агрей тип тә атаған был тауҙың нигеҙенең киңлеге 30 километр, ә бейеклеге диңгеҙ кимәленән 3 мең 770 метрға етә. Түбәһендәге ҡар йәйҙең иң эҫе көндәрендә лә иремәй, аҡ-аҡ булып ҡояшта емелдәп ята.



Эрджияс-Даг, Хәсән-Даг һәм башҡа вулкандар Төркиәләге иң әүҙем вулкандар һаналған, улар бер нисә миллион йылдар буйына алмаш-тилмәш урғылып торған. Вулкан атылған мәлдә яуған ямырҙар уның көлөн түбәнгә табан йыуып төшөрөү сәбәпле, киң майҙанда тиҫтәләгән тәрән йырындар, канауҙар барлыҡҡа килгән.

Хәҙер Үҙәк Анатолияла ямғырҙар ҙа элекке кеүек көслө түгел. Ҡайһы саҡта дауыллап яуғанда ямғыр һыуы төрлө тау тоҡомдарын баяғы йырындар буйлап Ҡыҙыл Ирмәк йылғаһына ағыҙып төшөрә. Ташҡын йыуып алып төшкән йомшағыраҡ таштар ҡаты таш өҫтөнә өйөлөп, убалар хасил итә башлай һәм ямғыр йыуа торғас, ослайып, шымарып бөткән ҡая бағаналар хасил итә. Юргюп ҡалаһына яҡын тауҙағы бағаналар ҙа шулай барлыҡҡа килгән. Уларҙың нигеҙен ҡаты таштар түгел, ә вулкандың һыуынып ҡатҡан лавалары тотоп тора. Ҡалын лаваларҙың ҡайһы берҙәре елгә сатнап ярылып төшөү сәбәпле бағаналарҙың "олоно" нәҙегәйеп, түбәһендәге ҡатлам бөтөн көйө ҡалғас, ул кәпәсле бағана кеүек ҡала. Әгәр нигеҙе ямғыр һыуынан көпшәкләнеп, бағана бата башлаһа, "кәпәстәр" ҙә ергә һеңә. Тик ундайҙар бик аҙ, сөнки бағаналарҙың нигеҙен башлыса ҡаты таштар хасил итә. Бөтөн донъя ғалимдарын һәм туристарҙы таң ҡалдырған таш бағаналар Каппадокия үҙәндәрендә миллион йылдар буйы ғорур рәүештә күккә олғашып ултыра.

***✓ Йыл да тирә-яҡ ауылдарҙан, ҡалаларҙан йыйылған иҫерек йәштәр Торатауыбыҙҙың тулҡынланып ултырған ҡылғанына ут төртә. Уларҙы тыйған, яуапҡа тарттырған кеше юҡ.***



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК

# РУХИ ҠӘЛҒӘМ, ТОРАТАУЫМ,

## йәки изге тауҙағы изге Әүлиә ҡәберенә сәйәхәтебеҙ тураһында

**Ишембай менән Стәрлетамаҡ ҡалалары араһында урынлашҡан Торатау - уникаль тәбиғәт ҡомарҡтыһы. Ул беҙҙең заман ғалимдары, белгестәре тарафынан күптән инде шулай тип ҡағыҙға теркәлеп ҡуйылған: "Торатау һәм Йөрәктау - бөтөн донъяға билдәле уникаль тәбиғәт объекттары. Улар бынан 250 миллион йылдар самаһы элек, Урал тауҙары формалашыуҙың иң башланғыс осоронда уҡ хасил булған һәм Ер йөҙөндәге иртә перм йәшендәге берҙән-бер тау массивтары иҫәпләнә. Улар фәнни, экологик, тарихи, мәҙәни һәм эстетик йәһәттән иң ҡиммәтле тәбиғәт ҡомарҡтылары". Ошо хәҡиҡәт 1965 йылдың 17 августында БАССР Министрҙар Советының 465-се һанлы ҡарарында ла теркәлә һәм Торатау республика әһәмиәтендәге тәбиғәт ҡомарҡтыһы тип яҙып ҡуйыла**.

* * *

Әата-бабаларыбыҙ күңеленә бынан меңәр йылдар элек үк яҙылып ҡуйылған Торатауҙың изге тау, изге урын икәнлеге. Халҡымда тау культы ныҡ һаҡланған, тигәндә, беҙ, юрматылар өсөн ул культ, әлбиттә, Торатауыбыҙ һыйында булған. Шуға ла олатайҙарыбыҙ ошо изге тау эргәһенә насар уйҙарынан таҙарынмайынса, бурысын үтәмәйенсә яҡынламаған. "Бурыс үтәмәйенсә, тауға яҡынлама" тигән был иң мөһим ҡағиҙә ҡанына һеңгән, бар йолаларында сағылған уларҙың. Журналист Сәлмән Ярмуллиндың "Киске Өфө"лә баҫылған "Зыярат ҡылдым Әүлиә тауына..." тигән мәҡәләһендә был хаҡта телгә алып үтелгәйне инде. Өҙөк килтерәм: "Башҡортостан буйлап бик күп сәйәхәт итеп, башҡорттарҙың ырымышаныуҙары тураһында ла яҙып ҡалдырған урыҫ ғалимы Иван Лепехин 1770 йылдың 14 майында Стәрле пристанына, буласаҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһына килә. Күпте белгән Исмаҡ ҡарттан ғалим пристандан 11 саҡрым алыҫлыҡта күренеп торған Торатау тураһында һораша. Ҡарт башҡорттарҙың был тауҙы изге тау тип иҫәпләүҙәре хаҡында әйтә. Шунан Лепехин, бик ҡыҙыҡһынып, тауға үҙе менеп ҡарамаҡсы була, әммә урындағы башҡорттар уның менән был изге тауға менеүҙән ҡырҡа баш тарта. Ғалим уларҙы нисек кенә өгөтләһә лә риза булмайҙар. "Тау алдында үтәргә тейешле бурыстарыбыҙ бар, әммә улар әле үтәлмәгән, ә шуларҙы үтәмәйенсә, тауға берәү ҙә менә алмай", - тиҙәр. Үҙҙәренең хаҡлыҡтарын иҫбатлау өсөн ошондай миҫал да килтерәләр. Бер татар, башҡортҡа үс итеп, уларҙың был изге урынын мыҫҡыл итер өсөн, тауға менеп, оло ярау иткән. Ләкин ошо гонаһы үҙенең һәм бөтә нәҫеленең башына етә. Үлем малайынан башлана. Үлер алдынан ул Торатауҙан төшөп килгән үҙен һәм ғаиләһе ағзаларын әҙгәләргә етешкән төрлө йыртҡыс кейектәрҙе күрә. Икенсе берәү, үҙенең тау алдындағы бурысын онотоп, төлкө ҡыуалап барып, тауға менеп китә һәм уны шунда айыу талай. Ошондай дәлилдәр килтерә башҡорттар. Ләкин Лепехин өгөтләүен дауам итә, тауға менгәндән уларға бер нәмә лә булмаясаҡ, тип ышандырырға тырыша. Бүләк таратып та, шарап эсереп тә ҡарай. Аптырағас, урындағы халыҡтың сәйәхәтселәргә мотлаҡ ярҙам итергә тейешлеге хаҡында губерна түрәләренең фарманын иҫтәренә төшөрә. "Шунан башкорттар беҙҙе тауға оҙатып барырға риза булды, - тип яҙа ғалим. - Текә булғанлыҡтан, тау башына менеп еткәнсе бер ун биш мәртәбә туҡтап, хәл йыйып алырға тура килде. Тау башы - ҙур ғына тигеҙлек, унда йәҙләгән өй ултыртып булыр ине. Бына бер саҡ бер башҡорт, ҡулын болғай-болғай, беҙгә табан йүгерә. Килеп еткәс:" Ни өсөн артышты һындырайыҡ, - тине асыуланып. - Тауға көсләп артылдырыу бәйғәмбәр ике ҡәүем һуғышсыларына ҡарап. "Юҡ, һуғышмайбыҙ", тип мығырҙанған ҡаушап ҡалған һуғышсылар бәйғәмбәрҙең өтөп алырҙай утлы күҙҙәренән күҙҙәрен йәшереп. Шунан Тәңре илсеһе икәнен аңлап, уның алдына тубыкланғандар. Хыҙыр Ильяс "Ниңә ил ҡыҙырып йөрөйһегеҙ? Ни эҙләйһегеҙ?" тигән һорау ҡуйған былар алдына. Тегеләр бер ни тип тә яуап бирә алмаған, сөнки улар үҙҙәренең ни эҙләгәнен дә белмәгән булған. Бәйғәмбәр әҙәмдәргә ошо һорауға яуап эҙләргә, бының өсөн ике ҡәүемдән дә иң шәп бишәр батырҙы һайлап алып, төрлө яҡҡа сығарып ебәрергә кәңәш итә. Ә инде баяғы һорауға яуапты батырҙарҙың ағыһына эләккән йүрмәлә эҙләргә кәрәк, тип иҫкәрткән. Шунан батырҙарҙың йүрмәләрен күрергә килермен, тип вәғәҙә китһен, әйҙә". Ике ҡәүем дә юлға ҡуҙғала. Торатау итәгендә унынсы батырҙың ата-әсәһе, туғандары ғына тороп ҡала. Бер саҡ ҡүктә быларҙың баш осонда ҡыйғыр әтәлге саңҡ-соңҡ килеп, өйөрөлә башлай. Күп тә үтмәй, көс-хәлдән тайған унынсы батыр күренә. Ҡулына бер сыбыҡ тотоп алған. "Ниндәй йүрмә таптың?" тип бер тауыштан ҡысҡырып, каршыһына йүгерә туғандары. "Аяғыма ошо сыбыҡ эләкте лә, артабан атларға аяҡ тартманы, Торатау буйҙары, һеҙ иҫкә төштегеҙ, шунан кире боролдом", ти икән батыр. Туғандары асыуланып, ҡотороп китеп, егеткә таш яуҙыра башлай. Шул ҡыҙыулыҡ менән был урынды ташлап, юлға сыға улар. Бара торғас, ҡапыл иҫтәренә килгәндәй, туктап ҡалалар. Мәрхүм булған егетте тейешенсә ерләмәй, Тәңре алдындағы бурысты үтәмәй китеп,




етмәгән, хәҙер икенсе гонаһ эшләйһегеҙ. Был һеҙгә бушҡа китмәйәсәк".

* * *

Бороңғо яҙмаларҙа, легендаларҙа Торатауҙың Хоҙай үҙе һәм Хыҙыр Ильяс көйөк бәйғәмбәрҙәре ҡурсалаған изге урын булыуы әйтеп ҡалдырылған. Бына шул легендаларҙың береһен иҫкә төшөрөп үтәйек. Уны Булат ағай Рафиков та "Ахырызаман көткәндә" тигән әҫәрендә телгә ала.

Беҙҙең юрматы ырыуы башҡорттары әле был урындарға килеп төпләнмәгән, айлы ерһыу эҙләп, ил ҡыҙырған мәле булған. Бына бер саҡ Торатау итәгенә килеп сыҡҡан улар. Ҡаршыларына икенсе бер ят ҡәүем тап булған. Иҫәнлекһаулыҡ һорашып тормаған былар, шунда уҡ уҡ-һаҙаҡҡа тотонғандар. Киткән алыш, киткән һуғыш. Шул саҡ ике араға тылсымлы таяҡлы, ап-аҡ кейемле, аҡ һаҡаллы, ут күҙле Хыҙыр Ильяс баҫҡан. Тылсымлы таяғы менән бер һелтәүҙә әҙәмдәрҙең ҡулындағы ҡоралдарын туҙанға әйләндергән. "Ниңә һуғышаһығыҙ, ни бүлешәһегеҙ?" тип һораған биреп, күҙҙән юғалған Хыҙыр Ильяс.

Бер аҙҙан ситкә таралышҡан батырҙар берәм-берәм ырыуҙаштары эргәһенә әйләнеп килә башлай. Береһе тимер киҫәге, икенсеһе тәгәрмәс, өсөнсөһө бал бирә торған ҡорт күсе, дүртенсеһе яҙыулы тире, бишенсеһе тағы ла камилыраҡ яһалған уҡ-һаҙаҡ, алтынсыһы булат ҡылыс, етенсеһе иген башаҡтары алып ҡайта. Улар барыһы ла үҙҙәре алып ҡайтҡан әйберҙәрҙең нисек яһалыуы тураһындағы серҙе, белемде лә һөйләп бирә. Шулай итеп, ун батырҙың туғыҙы бая бәйғәмбәр биргән һорауға яуап таба, йәғни уларҙың күсе артабан батырҙары ағыһына эләгеп ҡайтҡан йүрмә - һөнәр менән көн итәсәк булып сыға. Хәҙер инде шул һөнәрҙәрҙе тормошҡа ашырып ҡулайлы торак-урын эҙләргә кәрәк буласаҡ. Тик нишләптер унынсы батыр көттөрә. Уны көтмәй таралышыр инеләр, күктән Хыҙыр Ильястың уларҙы күҙәткәнен беләләр. Шунда барыһы ла күккә текәлә. Шул саҡ бәйғәмбәрҙең тауышы ишетелә:"Үҙегеҙҙең һорауға яуап табылды, тип иҫәпләүселәр ҙур гонаһ ҡылыуҙарын аңлай улар һәм кире боролалар. Килә торғас, "Ниңә үлтерҙек һуң әле уны?" тигән һорау тыуа һәр береһенең башында. "Бәлки, үлмәгәндер?" тигән өмөт уяна быларҙа һәм улар а ҙ ы м д а р ы н ҡыҙыулата төшәләр. Ләкин... Егетте таш менән бөргәләп ҡалдырған урында тауға ерегеп йәшел ҡалҡыулыҡ барлыҡҡа килгән, итәгенән шишмә ағып сыға, уның ярында ялбыр өйәңке үҫеп ултыра, өйәңкегә ҡыйғыр әтәлге ҡунаҡлаған... Ошоларҙы күҙҙән үткәреп, ни эшләргә белмәй торған әҙәмдәр янында тағы ла Хыҙыр Ильяс пәйҙә була һәм "Шунан, егетегеҙҙең йомағын систегеҙме инде?" тип һорай. "Бер нимә лә тапмай ҡайтыуы "Ошо ерҙән дә матурыраҡ башҡа урын юҡ", тип әйтеүе, ағыһына сыбыҡ эләгеүе "Ошонда тамыр йәйәйек", тиеүе булған бит", тип ҡыскырып ебәрә ҡәүемдәгеләр. "Эйе, батырығыҙҙы аңламай, харап иттегеҙ. Ул һеҙҙең өсөн изге йән булып ҡалыр. Ул әйтергә теләгәнсә, ошонда тамыр йәйегеҙ. Маҡсатлы булыр йәшәйешегеҙ. Изге ағасығыҙ өйәңке, ҡошоғоҙ ҡыйғыр әтәлге, ошо тауығыҙ, изге батырығыҙ һөйәктәренән хасил булған ошо түбәләс ерҙәге бурысығыҙҙы һәр саҡ исегеҙгә төшөрөп торор. Был ерҙәр мал үрсетеүгә, иген игергә ҡулай - шөғөлләнегеҙ шул һөнәрҙәр менән. Ә мин һеҙҙең эштәр барышын һәр саҡ күҙәтеп тормон".

Был легенданы иң тәүҙә Әхмәр ауылында йәшәгән, дин тәглиматен һыуҙай эскән, һуңғы һулышынаса Ислам ҡанунданынан бер тамсы ла ситләшмәй, изге китаптарынан, доғаларынан айырылмай йәшәгән аҡ күңелле өләсәйемдән - Мөкәрәмә Вәлидованан ишеткәйнем. Хыҙыр Ильяс бәйғәмбәрҙең гел генә ошо Торатау буйҙарын ҡурсылап йөрөүенә лә өләсәйем ышандырғайны. "Иң ауыр саҡтарымда ике тапҡыр юлыма тап булды бәйғәмбәр, һыйма, түҙ, тип кәңәш бирҙе", - тигәйне өләсәйем. Әлбиттә, мин өләсәй һөйләгәндәрҙе әкиәт итеп ҡабул иткәнмендер. Уның барлыҡ һөйләгәндәре, доғалары, хатта күҙҙәргә йәш алдырырлыҡ итеп көйләгән мөнәжәт-бәйеттәре лә әкиәт итеп ҡабул ителгән. Хәҙер генә улар тарих булып хәтер төпкөлөндә ярала. Һәр яңырған хәтер киҫәге өләсәйемәә аң менән тыңлай белмәгәнемә үкенес тыуҙыра. Күпме тарих, күпме мөһим мәғлүмәт уның менән бергә киткән...

* * *

Изгеләр эргәһендә генә тыуа мөғжизәләр, хикмәтле хәлдәр. Торатауыбыҙҙа ла булып торған, булып тора улар. Тау, Лепехин тураһындағы яҙмалар ҙа, әлеге легенда ла раҫлағанса, ысынлап та, халҡым өсөн изге урын. Уның ҡиммәтен тауыбыҙҙағы әүлиә ҡәберҙәре лә арттыра. Беҙ, ошо тирәләге ауылдарҙа йәшәгәндәр, был тауҙа әүлиә ҡәберҙәре барлығын һәр саҡ белдек. Өләсәйемдең ул хаҡта ҡабат-ҡабат һөйләгәне булды. Бәлки өләсәйем ул ҡәберҙәрҙең ҡайҙа, кемдеке булыуын да әйткәндер. Әлеге лә бағы... Хәйер, әкиәт күреп тыңланһа ла, тауҙа көнсығыш битләүҙә урынлашҡан ҡәбер тураһында әйткәне хәтерҙә яңырҙы бына. Ул ырыуҙаштары өсөн йәшәү мәғәнәһе эҙләп, шулар ҡулынан уҡ һәләк булған батыр тураһындағы әлеге легенданы ошо ҡәбергә бәйләп һөйләмәгәйнеме икән, тип уйлайым. Был хәтерҙе яңыртыуға тағы ла шул да сәбәпсе булды. Был хаҡта мин "Киске Өфө"лә яҙып сыҡҡайным инде. Хәтерегеҙгә төшөрәм.

Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында йәшәгән Бәхтейәр ағай Иҙрисов һөйләгәндәрҙән: "Беренсе май байрамында тирә-яҡ ауыл йәштәренең Торатауға менә торған йолаһы бар бит инде. Был матур йола һуңғы йылдарҙа йәштәрҙең эсеп, һуғышып, аҙаҡ Торатауҙың ҡылғанына ут төртөп яндырыуынан ғибәрәт булып китте. Был юлы ла күҙәттек янғынды, йәнебеҙ әрнеп, һукрандыҡ та, шуның менән эш бөттө (һүҙ былтырғы ваҡиғалар тураһында бара.- **Г.Я.**). Иртәгеһенә улым һәм тағы бер

***✓ Был изге урынға килгән һәр кеше бындағы өйөмгә үҙ ташын һалып, доғалар уҡып, үҙенә һәм яҡындарына, илгә һәм халыҡҡа матур теләктәр теләп китергә тейеш. Ата-бабалар йолаһы ошо.***

ауылдашым менән тракторға ултырып, Торатау буйындағы урманға кәртә әҙерләргә киттек. Бына урман моронон сығып, тау битләүендәге асыҡлыҡҡа килеп сыҡтыҡ. Кисәге янғын эҙҙәрен байҡайым, анда-бында төтөн быҫҡый ине әле. Ҡапыл күҙемә ике кеше һыны салынды. Быҫҡып ятҡан урындарға һыу һиптерәләр. "Янғын һүндереүселәр килгән икән", тип, үҙ алдыма һөйләнеп ҡуйҙым. "Ҡайҙа, ниндәй янғын һүндереүселәр?" тип аптырап һорай улым. "Ана бит..." тип, баяғы кешеләргә төртөп күрһәтергә итһәм... күңелемә шунда уҡ "Былар бит кешеләр түгел, ә фәрештәләр", тигән уй яҙылды. Иғтибарлабыраҡ баҡтым: йәшелһыу сапан кейгәндәр, ҡулдарын юғарыға күтәргән ыңғайына фонтан һымаҡ һыу урғыла. Йөҙҙәрен күрмәйем. Бына улар ҡапыл боролоп, еңел генә атлап, урман эсенә инеп киттеләр. Шул арала әлеге кешеләр йөрөгән урындан, баяғы урғылған һыу кеүек өйөрөлөп, ҡап-ҡара ҡойон сыҡты ла, Торатау буйлап китеп, күҙҙән юғалды. Бынын юлдаштарым да күрҙе, ә кешеләрҙе, йәғни фәрештәләрҙе улар күрмәгән булып сыҡты... Шунда бер нәмә ҡылт итеп хәтергә төштө. Олатайым Торатау буйындағы имән урманы морононда, тап бына әле мин һөйләгән ваҡиға урынында, әүлиә ҡәбере бар, тип һөйләй торғайны. Беҙҙең бесәнлек шунда ине. Бесәнгә барһаҡ, "Ошо тирәлә әүлиә ҡәбере бар, һаҡ ҡына йөрөгөҙ", тип иҫкәртә торғайны. Урынын да күрһәтте, Имән атлы әүлиә, тигәне лә хәтерҙә. Беҙ бала-саға ғына инек, уның һөйләгәндәренә әһәмиәт бирмәгәнбеҙ, ошоға тиклем был хаҡта иҫкә лә төшөрмәгәнбеҙ. Был фәрештәләрҙең ана шул әүлиә ҡәберен ҡурсалап йөрөүҙәрелер, тим мин..."

Бәхтейәр ағайҙы тетрәндергән был ваҡиға мине лә уйға һалды. Торатауыбыҙҙа әүлиә ҡәбере барлығы тураһындағы хәҡиҡәтте барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Ә бына шуның ҡайһы тәңгәлдә икәнлеген юллау, уны тәрбиәләү, әүлиәләр рухына доғалар арнау тигән нәмә башыбыҙға ла инеп сыҡмаған. Ә был ваҡиға беҙгә бурыс йөкмәтте. Яҙ башы менән ул изге урынды билдәләп, таҡтаташ ултыртырбыҙ, тип вәғәҙә бирҙем Бәхтейәр ағайға.

* * *

**Бына күптән түгел, апрелдең 20-дә, Өфөләге "Юрматы" ойошмаһы вәкилдәре - ҡор башлығы, танылған эшҡыуар, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов, уның улдары Рөстәм, Рәфис, шулай уҡ танылған эшҡыуар, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиелары селтәре етәксеһе Рәйлә Фәсхетдинова, уның улы Эдуард һәм мин иртән иртүк ошо бурысты тормошҡа ашырыу ниәте менән Ишембайға юл тоттоҡ. Юл буйы ҡойоп ямғыр яуҙы. Өләсәйемдең "Изге эшкә тотонорға торғанда Хоҙай алдыңа кәртәләр хасил итер", тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, юлдаштарымды йыуатам. Бер генә нимә борсой: асфальт юлдан төшкәс, Торатауҙың көнсығыш яҡ битләүенә бер-ике км арба юлы менән барырға кәрәк, шул араны машина менән үтә алырбыҙмы ла, ташты алып барып еткерә алырбыҙмы?**

**Бына мөғжизә: Торатауға яҡынлап ҡына килгәндә ҡап-ҡара болоттар таралып, ямғыр ҡойоуҙан туҡтап, ҡояш яҡтыртып ебәрмәһенме! Шулай булырын күңел һиҙенгәйне бит! Шуға ла кире боролоп ҡайтыу турағындағы уй башҡа ла инеп сыҡмағайны. Юлситендә беҙҙе Урманбишҡаҙаҡ ауылынан тарих уҡытыусыһы Абдрахман Вәлидовтың ҡаршы алып тороуы күңелгә тағы йылы өҫтәне. Ул машинаһы менән Торатауҙың теге битләүенә әллә нисәмә тапҡыр барып әйләнеп, уңайлы юл һайлауын, унда бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ үтеп буласаҡ икәнен хәбәр итте. Беҙҙең сәфәргә көн аяҙына, изге эштең хәйерле тамамланырына ышанған тағы бер нисә кеше - Ҡанаҡай-ҙан Бәхтейәр ағай Иҙрисов, Марат ағай Янбаев, Сәлихтан ауыл Советы рә-йесе Әхмәт Шанъязов, Ишембайҙан Данияр Мөхәмәтов килеп ҡушылды. Райондың Сәлих ауылында үтәсәк шәжәрә байрамын яҡтыртырға килгән Башҡортостан телерадиокомпанияһы журналистары ла был ваҡиғанан ситтә ҡала алманы.**

**Шулай итеп, иҫән-имен генә Торатауыбыҙҙың көнсығыш битләүенә барып еттек. Бәхтейәр ағай һөйләүенән әүлиә ҡәберенең ниндәй урында булғанын яҡынса төҫмөрләгәйнем - яңылышмағанмын. Бала саҡтан тап ошо ҡалҡыу урын, ошондағы бер нисә квадрат метр майҙандың таштар менән уратып алыныуы хәтеремә уйылып ҡалған. Тик ни өсөн был күренеш хәтергә уйылған, уны ололарҙан кемдер күрһәткән, һөйлә-гәнме, унынын белмәйем. Һәр хәлдә, мин был урын тураһында бынан бер нисә йыл элек тә иҫкә төшөргәйнем. "Тауҙарҙағы изгеләр, әүлиәләр ҡәберҙәре янында таш мәсеттәр ҡорола, йәғни ата-бабалар намаҙ уҡыу, доға ҡылыу өсөн ошо ҡәберҙәр эргәһендәге майҙанды таш менән уратып алыр булған, шуларҙы таш мәсет тип атап йөрөткәндәр", тигән мәғлүмәтте уҡығас, ҡылт итеп Торатауҙағы ошо әле беҙ таш ултыртҡан урын күҙ алдына килгәйне ул саҡта... Эйе, был урында, моғайын, таш мәсет тә булғандыр.**

**Эшҡыуарҙар Риф Иҫәнов һәм Рәйлә Фәсхетдинованың матди ярҙамы менән эшләнгән мәрмәр таҡтаташты изге урынға ултыртып, тирә-яғына бер аҙ таш өйҙөк. Ҡар иреп бөтмәү сәбәпле, әллә ни күп итеп таштар йыя, ҡәбер тирәләй өйөп китә алманыҡ. Әммә беҙ ул бурысты ҡалғандарға ҡалдырҙыҡ: был изге урынға килгән һәр кеше бындағы өйөмгә үҙ ташын һалып, доғалар уҡып, үҙенә һәм яҡындарына, илгә һәм халыҡҡа матур теләктәр теләп китергә тейеш. Ҡорбан килтереү тағы ла сауаплыраҡ эш булыр. Һәр кем дә тере ҡорбан сала алмаҫ, бының өсөн ваҡ тәңкәләр һибеү ҙә сауаплы эш булыр. Ата-бабалар йолаһы ошо. Һәм тағы шул: бынан һуң яҡташтарым Торатауҙа, изге Әүлиә ҡәбере тирәһендә**

**Ҡаҙағстанда әүлиәләр менән бәйле урындар, уларҙың ҡәберҙәре президенттары Нурсолтан Назарбаев ҡабул иткән махсус программа менән һаҡлана, тигән мәғлүмәтте Әбйәлил районынан Мөхәррәм ағай Биишев яҙып сыҡҡайны "Киске Өфө"лә. Ул үҙе лә барған был республикаға һәм әүлиә ҡәберҙәренең нисек ҡәҙерләнеүе, хөрмәтләнеүен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан. Кешеләр шул ҡәберҙәр янына барып, доғалар ҡыла, үҙенә, яҡындарына һаулыҡ, именлек теләй икән. Һәм, ысынлап та, мөғжизәләр булып тора: ошондай сәйәхәттәрҙән һәр кем сәләмәтләнеп, яңырып, таҙарынып ҡайта.**

**эске табындары ҡороп, күңел асыуҙан, тирә-яҡты бысратыуҙан тыйылыр, тигән өмөт бар.**

* * *

Торатауҙың башында, мәмерйә ауыҙы янындараҡ тағы бер ҡәбер бар. Уны ла әүлиә ҡәбере тип йөрөтәләр ул. Тик легендаларға ҡарағанда, был халыҡ ҡанын эскән ноғай ханының ҡәбере булырға тейеш. Хандар, ғәҙәттә, үҙҙәрен тау башына мендереп ерләргә бойорор булған. Шулай улар Тәңрегә яҡыныраҡ булабыҙ, тип иҫәпләгән.

Тауҙың көнсығыш битләүендәге өсөнсө ҡәбер менән бәйле ваҡиға бик ҡыҙыҡ. 60-сы йылдарҙа Торатауҙы сеймал өсөн вата башлағайнылар бит. Шунда шартлатыла был ҡәбер. Һөлдәләр тирә-яҡҡа һибелә. Шаһит ҡылыусылар баш һөйәген күреп, телһеҙ ҡала: маңлай һөйәгенә Хоҙай тамғаһы һуғылған була. Кемдер шунда был һәйкәлте Өфөгә, ғалимдарға ебәрергә тәҡдим индерә. Кемелер ошо ниәт менән баш һөйәген үҙе менән ала. Шулай эҙһеҙ юғала ул. Ҡәберҙән сыҡҡан башҡа һөйәктәрҙе шул урынға яңынан күмеп ҡуялар. Мөһөрлө, тимәк, изге кеше - Әүлиә ерләнгән булған икәне бәхәсһеҙ.

Әүлиә ҡәберҙәренең күбеһенең яҙмышы ошолай шул беҙҙә: аяҡ аҫтында тапалып, ҡәҙерһеҙләнеп яталар. Сөнки ҡәберҙәре булһа ла, үҙҙәре изгеләр тип нарыҡланһа ла, әүлиәләр тураһында бик аҙ беләбеҙ. "Изге кеше" булыуҙан тыш, тылсымсы, күрәҙәсе, дауалаусы, мөғжизәләргә һәләтле, кешеләр булған улар. Һәр хәлдә, бәйғәмбәр кеүек үк булмаһалар ҙа, барыбер Хоҙай Тәғәлә өнәгән, хуплаған юлда йөрөгән, Хоҙай Тәғәлә рәхмәтендәге кешеләр булған. Шулай булмаһа, үҙҙәре үлгәс тә улар рухы беҙҙе ҡурсалауҙы дауам итмәҫ ине. Беҙгә билдәле булған һәр әүлиә ҡәбере ошондайыраҡ ниндәйҙер тарих менән бәйле бит. Кешеләрҙе, ер-һыуҙы ҡурсалау тарихы менән. Бында ла шул уҡ хәл: Стәрлетамаҡтың сәнәғәт көүәттәре Торатауҙы ватырға һорай, тигән хәбәр менән әленән-әле ҡурҡытып торалар. Торатауҙың ҡурсаланып килеүенә ошо әүлиә рухы ярҙам итеүе бик ихтимал бит...

Әммә беҙ үҙебеҙ ҙә тау алдындағы бурысыбыҙҙы оноторға тейеш түгелбеҙ. Изге тау икән, тәбиғәт ҡомартҡыһы икән, Торатауыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға бурыслыбыҙ. Ләкин был бурыс үтәлмәй. Бөгөн тауҙың тирә-яғы ташландыҡ хәлдә. Ундағы һирәк осрай торған үҫемлектәр тапалып, юҡҡа сығып бөтөп бара. Йыл да тирә-яҡ ауылдарҙан, ҡалаларҙан йыйылған иҫерек йәштәр Торатауыбыҙҙың тулҡынланып ултырған ҡылғанына ут төртә. Уларҙы тыйған, яуапҡа тарттырған кеше юҡ. Тау итәгендәге иҫ киткес матур Туғарсалған күле буйы ҡырағай ял итеүселәр тарафынан таләфләнә, бысратыла. Яҡташтарымдың битарафлығына иҫтәр китерлек...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ҡаҙағстанда әүлиәләр менән бәйле урындар, уларҙың ҡәберҙәре президенттары Нурсолтан Назарбаев ҡабул иткән махсус программа менән һаҡлана, тигән мәғлүмәтте Әбйәлил районынан Мөхәррәм ағай Биишев яҙып сыҡҡайны "Киске Өфө"лә. Ул үҙе лә барған был республикаға һәм әүлиә ҡәберҙәренең нисек ҡәҙерләнеүе, хөрмәтләнеүен үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан. Кешеләр шул ҡәберҙәр янына барып, доғалар ҡыла, үҙенә, яҡындарына һаулыҡ, именлек теләй икән. Һәм, ысынлап та, мөғжизәләр булып тора: ошондай сәйәхәттәрҙән һәр кем сәләмәтләнеп, яңырып, таҙарынып ҡайта. Эйе, изгеләр янында ғына мөғжизәләр була. Мөхәррәм ағайға бер ҡаҙаҡ муллаһы былай тигән: "Ниңә әүлиә рухын юллап, беҙгә, Ҡаҙағстанға йөрөйһөгөҙ? Башҡортостанығыҙ әүлиәләр иле бит ул, үҙ әүлиәләрегеҙгә ҡәҙер күрһәтегеҙ, уларҙан сәләмәтлек һәм именлек һорағыҙ. Теләгәгеҙ беҙҙеке һымаҡ уҡ ҡабул буласаҡ", тигән. Уйланырға урын бар. Уйланырға ғына түгел, эш башларға ваҡыт. Республика Президенты кимәлендә ниндәйҙер программалар ҡабул ителһә - бик яҡшы, ләкин ниңә беҙ ундай рәсми документтарҙы көтөргә тейеш һуң? Һәр төбәктә бар әүлиә тауҙары, әүлиә шишмәләре, улар барыһы ла шундағы әүлиә ҡәберҙәре менән бәйле. Табығыҙ, билдәләгеҙ, кәртәләп ҡуйығыҙ уларҙы. Ишембайҙар һеҙгә өлгө күрһәтте. Әүлиәләр рухы иғтибар иткәнгә, илтифат иткәнгә үҙ хикмәтен күрһәтә тора. Еребеҙҙе, рухыбыҙҙы ла һаҡламаймы икән әле улар?**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# Кәләш әйттереп,

### йола үтә

**Кәләш әйттереү (әл-хитаб)- ғаилә ҡороуҙың мөһим йолаһы. Ислам дине тарафынан был йола йәштәрҙең бер-береһен яҡшыраҡ белеү маҡсатында индерелгән. Егет кеше өйләнергә теләүен туранан-тура йәки ҡыялатып ҡына ҡыҙға ла, уның ата-әсәһенә лә белдерә ала.**

Кәләш әйттереүҙең төп шарты булып ҡатын-ҡыҙҙың кейәүҙә булмауы тора. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ ире үлгәндән йәки айырылғандан һуң билдәле бер ваҡыт арауығы эсендә ундай тәҡдимдәрҙе ҡабул итә алмай. Бындай осраҡта ир кешенең өйләнергә теләүен уратып ҡына әйтергә хоҡуғы бар (Мәҫәлән, "Минең өйләнергә теләгем бар", йәки "Аллаһ миңә яҡшы ҡатын насип итеүен теләйем" һ.б.)

Икенсе шарт - ҡатын-ҡыҙ әйттерелмәгән булырға тейеш. Йәғни икенсе ир-ат тарафынан тәҡдим яһалған гүзәл затҡа өйләнергә теләү маҡсатында ниндәйҙер аҙым яһау ҡәтғи тыйыла. Шулай уҡ туған тейешле ҡатын-ҡыҙҙы әйттереү мөмкин булмаған хәл.

Өйләнешергә булған ир һәм ҡатын бер-береһе менән яҡшылап танышырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта был йәһәттән Ислам диненең ҡәтғи тыйыуҙары ла байтаҡ. Кейәү кешегә кәләшенең йөҙөнә һәм ҡул суҡтарына ғына ҡарарға рөхсәт ителә. Никахҡа тиклем егет буласаҡ ҡатыны менән икәүҙән-икәү генә ҡалырға тейеш түгел. Шәриғәт закондары буйынса, кейәү кәләшен ҡосаҡлай, ҡулын ҡыҫа алмай: ҡыҙ никахҡа тиклем сит кеше булып һанала.

Әгәр ҙә егет төрлө сәбәптәр арҡаһында был ҡыҙға өйләнергә теләмәһә (ҡыҙҙың ҡиәфәте, һөйләшеүе, үҙ-үҙен тотошо һ.б. оҡшамай икән), ул был хаҡта берәүгә лә өндәшмәҫкә тейеш. Сөнки был һүҙҙәрҙең ҡыҙҙы һәм уның ғаиләһен һаҡһыҙ рәнйетеүе мөмкин. Ошо уҡ тыйыуҙар ир-егеткә кейәүгә сығырға ризалығын бирмәгән ҡатын-ҡыҙға ла ҡағыла.

Ҡайһы бер ир-егеттәр буласаҡ ҡатынын яҡшыраҡ белеү маҡсатында уның менән бер туҡтауһыҙ осраша, аралаша башлай. Был Ислам диненә ҡаршы килгән хәл.

Йәштәр өйләнгәнгә тиклем үҙҙәренең кире яҡтарын йәшерергә тырыша. Бер-берең менән артыҡ һоҡланыу күҙҙәрҙе томаландыра һәм айыҡ ҡараштан мәхрүм итә. Оҙайлы аралашыуҙарҙан һуң йәштәрҙең береһе өйләнешеүҙән баш тартһа, егет йә ҡыҙ үҙҙәренең абруйына тап төшөрөүе бар. Икенсе яҡтан, нисәмә пар әллә күпме йылдар осрашыуҙарҙан һуң өйләнешеп, бер-ике айҙан һуң ғаиләһен тарҡата?

**Әгәр ҙә егеткә йәки ҡыҙға буласаҡ тормош иптәше оҡшамай икән, улар никахтан баш тарта ала. Әйттереү - һүҙ ҡуйышыу менән бер булһа ла, был унан һуң ҡәтғи рәүештә өйләнергә кәрәк, тигәнде аңлатмай. Әгәр ҙә әйттереү юҡҡа сығарылһа, бер-береңә бүләк ителгән әйберҙәр кире ҡайтарылырға тейеш.**

*ҒӘФҮ ИТ...*

# ТЕЛӘМӘГӘН БАЛА... иң яратҡанға әйләнә

**- Икенсе баламды бит бөтөнләй тапмаҫмын тигәйнем. Түҙер хәлдәрем ҡалмағас, айырылып китергә йыйынғанда, ауырлы икәнемде белдем. Ике баланы эйәртеп, ҡайҙа барайым? Аборт эшләтергә тип, район үҙәгенә барғайным, әхирәтем: "Ҡуй, иҫәрләнмә, бына мин дә икенсегә бала көтәм, бергә уҡырҙар, бергә үҫерҙәр", - тип, өгөтләне. Ҡайтҡас, йәнә шул уҡ тормош башланды: ир көн һайын эсеп ҡайтты, енләнеп ыҙалатты. Яңылыш яҙмышымды үҙ ваҡытында төҙәтеп ҡалайым тип, тағы киттем абортҡа. Врач отпускыла булып сыҡты. Өсөнсөгә барғанда һуңлағайным инде. Ауырымды төшөрөр өсөн көйәнтәләп һыуҙар ҙа ташыным, мунсала ла сабынып ҡараным, ғүмере булғандыр инде баламдың - тыуҙы барыбер.**

Күрше бүлмәлә әхирәте менән һөйләшә-һөйләшә сәй эскән әсәйемдән ошо һүҙҙәрҙе ишетеп ҡалғанда миңә 12 йәштәр самаһы ине. Һүҙ минең хаҡта. Әсәйемдең әсе яҙмышын үҙ мәлендә үҙгәртә алмауында, бала хаҡына тиң булмаған кешеһе менән ғүмерен заяға үткәреүендә мин дә ғәйепле, тимәк. Ишетеп ултырғанымды белә тороп, шул турала ниңә һөйләне икән әсәйем?

Эскесе ирҙән бала табырға йыйынған әсәйемдең ҡорһағына ҡарап, уны йәлләүселәр, был баланы ниңә таба икән, тип уйлағандыр. Тыумаҫ борон уҡ миңә барыһы ла, хатта әсәйем дә "кәрәкмәгән нәмә" итеп ҡараған. Ошоларҙы уйлаһам, түбәнһенәм, кәмһенәм. Насар фекерҙәрҙе кире ҡағыусы һаҡланыу стеналары ла юҡ миндә. Ауырлы саҡта баланы яратып, теләп йөрөйһөң икән, әсә мөхәббәте шул стенаны барлыҡҡа килтерәлер - әсәйеңдең һине яратыуына ышаныу тирә-яҡтың йоғонтоһонан һаҡлайҙыр.

Теләмәйенсә тыуған бала булыуыңды белеү шул тиклем ауыр. Ҡатмарлы тормош юлында ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡһам, теләгәндәрем килеп сыҡмаһа, гел генә әсәйемдең ошо "ризаһыҙлығы" иҫемә төшә. Бик ҡыйын саҡтарҙа "Был донъяға тыумаһам да үкенмәҫ инем кеүек" тип уйлаған мәлдәрем булды. Хатта шуның өсөн ҡайһы саҡ әсәйемде ғәйепләй инем. Был яңылыш уй, хата фекер. Әммә яңылыш юлдан киткән яҙмышты үҙгәртеү ауыр булған кеүек, яңылыш фекерҙе үҙгәртеү ҙә ҡыйын икән. Уның нигеҙе бар.

Бөгөн мин әсәйемдең иң яратҡан балаһы булыуымды беләм. "Ҡайһы бармағымды тешләһәм дә ауырта. Һеҙ ҙә шулай - барығыҙ ҙа берҙәй ҡәҙерле миңә", тиһә лә, иң ауыр ваҡыттырында хәбәрҙәрен тәүҙә миңә һөйләй, иң шатлыҡлы кисерештәрен минең менән бүлешә. Шунан, үҙе лә һиҙмәҫтән: "Әл дә һин бар әле, ҡыҙым, нишләр инем һин булмаһаң", - тип ҡуя. Бала саҡта ишеткән теге хәбәр мине бер аҙ үҙ-үҙемә бикләңкерәп үҫтерһә лә, ошо һүҙҙәр иҫкә төшһә, иңдәремдә әллә ниндәй осор ҡанаттар талпынғандай, рәхәт булып китә.

Беләм, әсәй, выжданыңды ғазаплаған шул үкенесең өсөн ғәфү үтенгең килә. Һин дә бел: һинең миңә булған яратыуың үпкә уйҙарымды күптән үҙгәртте инде. Үҙең ғәфү ит, үҙең кисер мине, Әсәй.

**НӘФИСӘ.**

# Үҙ эштәреңдең халҡың күҙендә күреп йәшәү

**Академик Фәнил Фәйзуллин нигеҙ һалған социаль-философик һәм социологик мәктәп беҙҙең илдә генә түгел, сит илдәрҙә лә киң билдәле. Ул ижтимағи фән өлкәһенә тәүге тапҡыр ҡалалар социологияһы концепцияһын индергән ғалим булараҡ танылды. Бөгөн ул һикһәнгә яҡын фән кандидаты, ҡырҡҡа яҡын фән докторы әҙерләүсе, фәндә үҙ "балаларын" ғына түгел, "ейәндәрен"дә күреп шатланған "олатай", йәғни уның етәкселегендә фән докторҙары булғандар үҙҙәре үк фән докторҙары әҙерләп өлгөргән. Уҡыусылары Төмәндә, Новосибирскийҙа, Омскиҙа, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Францияла, Израилдә һәм башҡа илдәрҙә фән өлкәһендә, төрлө урындарҙа хеҙмәт итә.**

**Беҙ Фәнил Фәйзуллиндың фәнни эшмәкәрлеге хаҡында матбуғат сараларындағы сығыштарынан, ғилми хеҙмәттәренән уҡып беләбеҙ. Ә бына ошондай абруйлы дәрәжәгә еткәнсе ғалимдың ниндәй тормош юлы үтеүен күбебеҙ белмәй ҙә. "Монолог" рубрикаһы ҡунағы - Башҡортостан Фәндәр Академияһы академигы, философия фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация университеты профессоры Фәнил Фәйзуллин үҙе һәм үҙен борсоған мәсьәләләр хаҡында сығыш яһай.**

## ФИЛОЛОГИЯНАН - ФИЛОСОФИЯҒА

Өфө районының Яңы Ҡарашиҙе ауылында тыуғанмын. Ул ауыл әлеге Иглин районының Иҫке Ҡарашиҙе ауылынан бүленеп сыҡҡан. Яңы ауылдың барлыҡҡа килеүе ситтән килеүселәрҙең башҡорт ерҙәрен баҫып алыуына бәйле, һәм атай-олатайҙарыбыҙ, үҙ асылын һаҡлап ҡалыу маҡсатында, яңы урынға күсенгән дә инде. Ҡартатайым аслыҡҡа дусар булған ғаиләләргә биҙрә менән балыҡ таратып йөрөүсе изге бер кеше булған. Артабан Иглин районының Иҫке Ҡыбау ауылына күсенгәнбеҙ, атайым менән әсәйем мәктәптә уҡытыусы булып эшләй башлаған. Атайым 25 йылдан ашыу мәктәп директоры, әсәйем башланғыс кластар уҡытыусыһы булды, башҡорт теленән уҡытты. Әле лә уларҙы хөрмәтләп



иҫкә алалар. Бик изге күңелле һәм принципиаль кешеләр ине. Уҡытыусылар ғаиләһендә үҫкәнгәме, китап араһында булдым. Һәр бер бала, үҫмер кеүек, шиғыр ҙа яҙа инем. Күңелемдәге шиғри илһам, илаһи дәрт һаман да юғалмай.

Китапханаға килгән һәр яңы китапты уҡып барҙым. Рауил Низаметдинов ағай төн урталарына тиклем үҙе уҡыған китаптарҙың йөкмәткеһен һөйләй торғайны. Унан Сократ, Аристотель тигән философтар хаҡында тәүләп ишеттем. 50-се йылдарҙың аҙағында Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусылары студенттарын Иҫке Ҡыбау мәктәбенә практикаға алып килә башланы. Ғәли Ғәлиевич Сәйетбатталовты шул мәлдән беләм. Өфөгә яҡын булғас, Сәғит Ағиш, Баязит Бикбай кеүек ҙур яҙыусылар ҙа беҙгә йыш килә ине. Зөфәр Ғәбсәләмовты ла хөрмәтләп иҫкә алам.

Ошо кешеләр менән осрашыу-аралашыу артабанғы тормош юлымды билдәләне. "Мин философ буласаҡмын!" тигән маҡсатты тап шул һөҙөмтәлә ҡуйҙым. Әммә КПСС Өлкә Комитетының махсус йүнәлтмәһенән башҡа философия, политэкономия, КПСС тарихы кеүек фәндәр янына яҡын да килерлек түгел икән. Документтарымды әле эшләп йөрөгән Өфө авиация институтына бирҙем. Имтихандарымдың барыһын да "бишле"гә, әммә ауыл мәктәбендә урыҡ-һурыҡ уҡыу сәбәпле, сит телде "өслө"гә тапшырҙым. Тәүҙә оят һымаҡ ине, әммә артыҡ ҡайғырманым.

Техник училищела уҡып, заводҡа эшкә барҙым. Унда "Премия бирмәҫкә!" тигән исемлектең башында һәр саҡ минең фамилия, премия бирелмәүҙең сәбәбе лә "За чтение литературы" тип яҙыла ине. Заводта бар нәмә автоматлаштырылғайны. Шуға күрә төңгө сменала йоҡлап китмәҫ өсөн мин китап уҡый торғайным. Шулай итеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына киске бүлеккә индем һәм Черниковканан ике йыл буйы йөрөп уҡыным. Аҙаҡ көндөҙгө бүлеккә күстем. Унда Ирек Кинйәбулатов, Әхмәт Сөләймәнов, Сафуан Әлибаев, Миңлеяр Дилмөхәмәтов, Вафа Әхмәҙиевтар менән бергә уҡыным. Арҙаҡлы ғалим Жәлил Кейекбаев уҡытты. Бер саҡ уға: "Жәлил Ғиниәт улы, башҡорт телендә ҡойроҡло "Ж" юҡ бит, нишләп исемегеҙҙең баш хәрефенә ҡойроҡ ҡуяһығыҙ?" тигән һорау бирҙем. Ул мине 45 минут буйына һүкте. Тәнәфескә сыҡҡас, ул үҙемә генә: "Туғанҡайым, ул бит юридик акт. Наҙан силсәүит сәркәтибе мине теркәгәндә ҡуйған ул ҡойроҡто. Шул ҡойроҡтан ғүмерем буйы ҡотола алмайым. Бына шуның өсөн дә тырышып уҡығыҙ!" - тине. Ул миңә аспирантураға инергә кәңәш-фатиха бирҙе. Уның улы Морат Кейекбаев докторлыҡ диссертацияһын минең етәкселектә яҡланы.

Университетты бөткәс, Иглин районының Турбаслы мәктәбендә завуч булып эшләнем. Мәктәптә эшләгәндә сит телдән һәм философиянан кандидатлыҡ имтиханы тапшырып, философия буйынса аспирантураға индем. Кандидатлыҡ диссертацияһын тиҙ яҡланым, әммә ул саҡтағы партияның ҡарары буйынса ижтимағи фәндәр буйынса докторлыҡты 40 йәшкә тиклем яҡлау мөмкин түгел ине. Буласаҡ доктор 40 йәшкә тиклем сәйәси өлгөрөү баҫҡысын үтергә тейеш булды. Шуға күрә, 36 йәшемдә үк докторлыҡ диссертацияһы әҙер булыуға ҡарамаҫтан, 40 йәшем тулыуын көттөрҙөләр. Йәшем тулғас та, яҡланым һәм СССР-ҙың иң йәш фән докторҙарының береһе инем.

## СУВЕРЕНЛЫ АКАДЕМИЯ

90-сы йылдар башында "Суверенлы республикаға - суверенлы академия" тигән мәҡәләләр менән сығыш яһап, Башҡортостан академияһын төҙөү тураһында һүҙ ҡуҙғата башланыҡ. Рәсәй Фәндәр Академияһы бөтөн президиумы менән беҙгә ҡаршы сыҡҡан ваҡытта президентыбыҙ Мортаза Рәхимов яҡлап сыҡты. Башҡортостан Фәндәр Академияһы юридик берәмек булараҡ теркәлде, уны финанслауҙы республика үҙ өҫтөнә алды. Бер үк ваҡытта Президент беҙҙең алға ҙур бурыстар ҡуйҙы, йәғни академия Башҡортостан үҫешенә ярҙам итергә, ҡабул ителә торған ҡарарҙарҙың, закондарҙың эксперты булып сығыш яһарға тейеш. Башҡортостандың милли идеяһы менән Башҡортостан Фәндәр Академияһы идеяһы бер бөтөндө тәшкил итергә тейеш. Башҡортостанды беҙ һаҡламаһаҡ, уның Фәндәр Академияһы ла булмаясаҡ. Әйтәйек, математика, физика, химия буйынса асыштар беҙҙең академияла ла, Ҡазанда ла, Чебоксарҙа ла, Чикагола ла, Пекинда ла, Токиола ла яһала. Әммә беҙҙең академия был асыштар яһауҙан тыш, үҙенең ғилми эшмәкәрлеген Рәсәй Федерализмын, республика дәүләтселеген һаҡлау өсөн йүнәлтергә лә бурыслы. Быға тиклем Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһы күп нәмәгә беҙҙән өйрәнә килде һәм һуңғы ваҡытта улар күп йәһәттән алға китте. Беҙгә хәҙер үҙ дәүләтселегебеҙҙе һаҡлау буйынса ҡайһы бер нәмәләргә уларҙан өйрәнеү фарыз.

Һуңғы осорҙа "суверенитет" тигән һүҙ телебеҙҙән төшөп ҡалды тиерлек. Әммә академияның ул һүҙҙе кире ҡайтарыр фәнни көсө, интеллектуаль потенциалы бар.

***Рәсәйҙең федератив төҙөлөшөнә нигеҙ ташын башҡорттар һалған. Бейҙәр Аҡ батшаға барыр алдынан һәр береһе үҙ ырыуын йыйып һөйләшкәндән һуң ғына, Рус дәүләтенә ҡушылырға тигән ҡарарға килгән. Был халҡыбыҙҙың иң юғары кимәлдәге демократ булыуы хаҡында һөйләй. Рәсәй халыҡтары араһында тик башҡорттар ғына үҙ еренә аҫабалыҡ хоҡуғын һаҡлап ҡала алған. Ниңә, Аҡ батша башҡорттарҙы яратҡан өсөн биргән тиһеңме бындай хоҡуҡты? Юҡ, хоҡуҡты бирмәйҙәр, ә яулап алалар. Тимәк, башҡорттар ул саҡта шундай ҙур көскә эйә булған батшалыҡ алдында үҙҙәрен ихтирам иттерә алырлыҡ, үҙҙәре менән иҫәпләштерергә мәжбүр иттерерлек дипломатик һәм интеллектуаль көскә эйә булған.***

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# Мәхүп ҡарсәйем

## Таяуы булған юлдан тайпылмай

**Һуғыш йылдарында үлемдән йолоп ҡалғаны өсөн атайым Мәхүп ҡарсәйемде һуңғы һулышына тиклем ел-ямғыр тейҙермәй ҡараны. Һуңғы дүрт йылды, аяҡтарынан яҙғас, уны күтәреп йөрөттө. Сабый ир баланың күңелен етемлектән өшөтмәгән өсөн... Рәхмәттән дә оло, мөхәббәттән дә көслө йән тартыуы тип атала бындай мөнәсәбәт.**

Етем балаларҙы патронат тәрбиәгә алыу тураһында йыш яҙа башлағастар, атайым һәм уны уллыҡҡа алған Мәхүпъямал ҡарсәйем хаҡында һөйләү теләге уянды.

Яҙмыш бер йәше лә тулмаған атайымды, Булат Мәсәлим улы Бирҙеғоловты, Ейәнсура районы Юнай ауылына килтереп ташлай. Уны уллыҡҡа алған Мәхүпъямалдың фамилияһына күсеп, Мәхмүтов булып китә ул. Атайымды етемлектән йолоп ҡалған ҡарсәйем һис шикһеҙ бөйөк ҡатын. Донъяға килтергән үҙ әсәһе күрше Иҙәш ауылында яңы ғаиләһендә алты бала үстерҙе. Атайымды, оло улын, һыйындырырға мөмкинселеге лә булмағандыр. Былай ике карсәйем бик татыу йәшәне. Йырсы, гармунсы, мандолинасы, оҫта ойоштороусы булып дан алған атайымдан 6 бала, 15 ейән-ейәнсәр ҡалды.

Мин Мәхүпъямал ҡарсәйемде яҡшы хәтерләйем. Итәгенә ятып йоҡлағаным, үҙ ҡулдары менән теккән ҡулдәктәрен кейгәнем. Күкһел тоҫтағе бөҙрә сәстәрен тараған ваҡытта:

"Иртәнсәккәй тороп тышҡа сыҡһам,
Буҙ турғайҙар һүтә уйымды...", - тип йырлағанын иҫләйем. Уның убырлы ҡарсыҡтар тураһындағы ҡарһүҙҙәрен, йомаҡ әйгәнен тыңлап үҫтем. Ҡарсәйем кешеләргә файҙа килтерә-килтерә үҙенә үҙе таяуҙар терәгән дә, юғалтыуҙарға, ауыһыҙ яҙмышҡа үс итеп, йөҙ йыл йәшәгән. Үкһеҙ ҡалған йәш йәндәргә таяу булып йәшәгән ул. Аллаға шөкөр, туғандарыбыҙ күп. Ҡан түгел, йән тәрбиәһе алып үҫтек беҙ.

Мәхүпъямал ҡарсәйемде иҫләһәм, ниңәлер уның ауыр һуғыш йылдарындағы образы күҙ алдыма баҫа.

Ураҡ осоро. Һалам башлы өйҙәр аслыҡтан, талсығыуҙан миктәп бөткән халыҡтың үҙенә оҡшап тора. Тош-тош ерҙән һаламы йолҡоп алынған, ел-ямғырҙан ҡара тәҫкә инеп, шыҡырайып ҡатҡан һалам түбәләр эсте бошора. Ҡара ергә баҫҡандан алып өҙлөкһөҙ йүгереү, бар тапкан-таянғанды бураларға һалып ҡалыу ниәте кешеләргә йоҡо бирмәй. Мәхүптең дә өйә тас үҙе. Эстән ете таяу терәлгән. Тыштан ситән соланы ауыңҡырай бирел аушайған. Таҙа кәүҙәле, уҫал ҡарашлы был ҡатын, кәрәкһә, ир эшенә егелә, көнө килһә, бисәләр эшенән баш тартмай. Арығанлығы күренеп торһа ла, шартлата баҫып баҫыуға йүнәлә ул көн дә. Ә күңелендәге таяуы етәү генә булһасы... Һуғышта ире үлеп ҡалғас, тамаҡ шешенән бер-бер артлы өс ҡыҙын юғалтҡас, нисек кенә артабан йәшәп китә алғандыр? Күңеленә таяуҙарҙы ҡайҙан алды икән?

Ҡояш ҡалҡҡанға тиклем көлгә күмеп алған алабута күмәсен, һауыт-һабаларын төрөп, беләгенә элә лә, зәңгәр күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ ҡыпыслап, ойоп торған етемәген килбәтле генә итеп елкәһенә ултырта ла эшкә китә. Шулай кәрәк: ғәләм кеше көтә уны. Һелкетә баҫып килгән булдыҡлы ҡатынды һәр саҡ көтәләр, ышаналар, бер аҙ шөрләйҙәр ҙә. Тракторсыларҙың береһе тәнә көн усаҡ тирәһендә йүгергеләгән таҡыр баш малайға ҡарап:

- Инәй, сдавайт ит шуны детдомға, - тигәненә Мәхүп һарыҡай малайҙың йылтырап торған танау аҫтын итәге менән һөртөп алды ла, супылдатып үбеп ҡуйҙы.

- Ул - минең киләсәгем, - тине. Булаты таяу булған икән ҡоршауланып бөткән күңеленә...

**Нәфисә ТУЛЫБАЕВА.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### "Тиреһен өтөп ашайҙар..."

Һуғыш осоро. Ирәндек ҡуйынында урынлашҡан Шаҙығай ауылының башланғыс мәктәбендә уҡытҡан Ушанов ағай (күренекле артист, бейеүсе, ҡурайсы Башҡортостандың халыҡ артисы Ғиниәт Ушановтың ҡустыһы) дәрес алып бара. Дәрестең темаһы йорт хайуандарының файҙаһы. Ошондай һөйләшеү бара:

- Йә, әйтегеҙ әле, балалар, кәзәнең кешеләргә ниндәй файҙаһы бар?

Балалар, ҡул күтәреп, бер-бер артлы яуап бирә:

-Дебетен тарап алып, Мәғниткә (Магнитогорскиҙы беҙҙә шулай исемләйҙәр) алып барып һаталар.

-Дебетенән шәл бәйләйҙәр.

- Йөнөн ҡырҡып алып, балаҫ һуғалар, ойоҡ бәйләйҙәр.

- Шарф та бәйләйҙәр.

-Кәзә бәрәсләһә, бәрәстәре һөтөн имә.

- ыйырыбыҙ быҙауламаған саҡта, һөтөн һауып алып, беҙгә лә эсергә әсәйебеҙ.

-Кәзә ҡартайһа, һуйып, итен ашайҙар.

- Тағы, балалар, тағы? - тип һорауын дауам итә уҡытыусы.

- Тиреһен, ҡышҡыһын өй йылы булһын өсөн, солан яғынан ишеккә ҡаталар (ҡөпләйҙәр).

-Тиреһен өтөп ашайҙар... - ти бер малай.

...Эйе, һуғыш килтергән аслыҡ арҡаһында кешеләр нимә генә ашаманы. Ҡатып бөткән тиренең йөнөн өтөп, ҡырып-йыуып таҙартып, ебетергә һалып ҡуйып, аҙаҡ бешереп ашанылар. Фермалағы һыйырҙар быҙау һалһа, уны ла булешеп алдылар, һыйырҙың сыуынын да ашанылар...

### "Фазила, ҡапҡаны ас!"

Ярылғап ауылыныҡы Әҙһәм ағай һуғыш бөтөп, халыҡҡа бер аҙ иркенерәк тормош килгәс (үҙе лә фронтовик, ауыр контузия алған), Мәғниткә мотоцикл һатып алырға китә. Белеше менән бергәләп "Кәзә" мотоциклы һатып алалар (Беҙҙең яҡта бәләкәй генә ул мотоциклды шулай тип йөрөтә торғайнылар). Урыҫ белеше ағайға йөрөү тәртибен өйрәтеп, аҙаҡ "экзамен" алып, ҡайтарып ебәрә.

Ағайыбыҙ ярайһы уҡ оҙон юлды (50-60 саҡырым) имен үтә. Ауылға килеп инә, ике урамды киҫеп үткән Ҡәтмәнде йылғаһы кисеүен дә сыға. Әммә өйөнә еткәс, туктата алмай бит мотоциклын. Ахырҙа: "Фазила, ҡапҡаны ас!" - тип ҡысҡырып өйҙәре эргәһенән үтеп китә. Боролоп килешләй: "Фазила, ҡапҡаны ас!" - тип тағы яу һала.

Шулай бер нисә тапҡыр әйләнеп йөрөп, ҡатыны Фазила апайҙан ҡапҡаны астыра алмағас (ишетмәгән бит инде ул!), ауыл осондағы ҡыйлыҡҡа алып барып, ауҙара мотоциклын - үҙе лә йомшаҡ урынға ҡолай, мотоциклы ла имен. Был турала Баһаув иптәш яҙғайны "Киске Өфө"лә. Ул был турала ауылдан алыҫ булмаған Ҡыҙыл йылғаһына ауҙара, тип яҙғайны. Миңә атаһының ошо мәҙәге тураһында яҡын киленем, уҡытыусы Кирәйева Флүрә һөйләгәйне. Әҙһәм ағай ҙа, Фазила апай ҙа, Флүрә килен дә мәрхүмдәр инде. Һәйбәт кешеләр ине. Урындары ожмахта булһын.

Ә лаҡап ҡалды. Хәҙер ауылда ирҙәре берәй яктан ҡайтһа (мотоциклдамы, аттамы, машиналамы - уныһы мөһим түгел), хәләл ефеттәрен шаяртып алыу өсөн "Фазила, ҡапҡаны ас!", тиҙәр икән.

### "Ладно, скажу свой петуху"

Беҙҙең ауылда бик уңған, йор һүҙле, һәр ваҡиғанан, күренештән ҡыҙыҡ яғын табып һөйләй торған һәләте булған апай йәшәне. Яңғыҙ улын бер үҙе тәрбиәләп үстереп, һуғыштан алда ла, һуғыш мәлендә лә колхозда ең һыҙғанып эшләне (1911 йылғы ине ул, 2-3 йыл элек мәрхүмә булды). Бер мәл Мәғниткә йомортҡа һатырға бара был. Үҙе нисек һөйләне, шулай яҙам.

-Ултырабыҙ теҙелешеп йомортка һатыусылар. "Мелкий, мелкий", ти ҙә китә мәрйәләр. "Тукта, уҡытайым әле быларҙы", - тинем дә: "Ладно, скажу свой петуху, что большой сделал...", - тип, йоҙроғомдо төйөп күрһәттем.

Көлөшә башланылар, улар эргәһенә ир заттары ла йыйылып китте. "Что там, что случилось?" - тип һорайҙар. Яуапты ишеткәс, үҙҙәре зыу булып көләләр. "Ай- да, бабушка!" - тиҙәр.

Минең эргәлә үҙе бер баҙар хасил булды, йомортҡамды ла алып бөттөләр...

### "Гитлерҙы ҙур хәреф менән яҙмайыҡ!"

Бөйөк Ватан һуғышынан һуңғы ауыр йылдар ине. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙең яҙылышына бәйлә диктант яҙҙырам. Балалар яңғыҙлыҡ исемдәрҙең һөйләм уртаһында килгәндә лә ҙур хәреф менән яҙылыуын баштарына һеңдерергә тейеш. Бер малай яҙыуынан туктап:

- Апай, Гитлерҙы ҙур хәреф менән яҙмайыҡ! - ти.

- Ярай, үҙең теләгәнсә яҙ, -тинем ипләп кенә, башҡа уҡыусыларҙың иғтибарын нык йәлеп итмәҫ өсөн.

"Һөҙөмтәһе нисек булды?", тиһегеҙме? Синыф уҡыусыларының яртыһынан күбеһе һөйләм уртаһында килгән Гитлер фамилияһын бәләкәй хәреф менән яҙған. Хатаға иҫәпләмәй, тик "г" хәрефенең аҫтына ҡыҙыл кәләм менән һыҙып ҡына ҡуйҙым. Яҙма эштәренә анализ яһағанда, ошоға ҡағылышлы оҙаҡ ҡына һөйләштек.

"Ярай, үҙең теләгәнсә яҙ", - тигәнде әкрен генә, баш һелкеп кенә әйтһәм дә, яҙыу менән шөғөлләнгән уҡыусыларҙың күбеһе аңлап алған бит әле, бахырғыналарым, ҡәҙерләләрем. Ошо синыф, ошо дәрес һаман минең күҙ алдымда тора, төшөмә инә.

Миллиондарҙың башын ашаған, шулар эсендә үҙҙәренең дә туғандары булған, тере ҡалып та, ауыр яраларынан интеккән ауылдаш ветерандарҙы белгән, әле булһа һуғыш әҙәмтәләрен күреп йөрөгән балалар һуғышҡа

АҠЫЛ - ҠАҘНА

# Кешелекте...

## һуғыш хур итә

● Яу яланында һәләк булғандар һуғыш мәсьәләһен хәл итә алмай. Юғиһә, һуғыштар ҡабатланмаҫ ине.

**А. Барбюс**

● Һуғыш иғлан иткән саҡта уның әҙәмтәләре нисек булырын алдан белмәгән дәүләт эшмәкәре үҙ башына ләғнәт уҡый.

**О. Бисмарк**

● Булғанына шөкөр итеп, күршеһенең уңышына көнләшмәһә, кеше күптән инде тыныс һәм азат йәшәр ине.

**Ж. Лабрюйер**

● Кешелекте иң хур иткән нәмә - һуғыш.

**Ф. Фенелон**

● Кешелек меңәр йылдар буйы аҡылына килә алмайынса, һаман да һуғыша.

**Ж. Лабрюйер**

● Туғандар булып йәшәргә тейешле кешеләрҙе һуғыш ҡырағай хайуандар сүрәтенә индерә.

**Вольтер**

● Аҡсаға табыныу бөткән көндә һуғыштар ҙа бөтәсәк.

**Квинтилиан**

● Тәүтормош кешеләрен дөрөҫ юлдан яҙҙырған ялған тәүге һуғыштарҙың башы булған. Әгәр ҙә бер кешеләр икенселәрҙең улар менән идара итеүенә юл ҡуймаһа, һуғыштар ҙа булмаҫ ине.

**Ж. Лабрюйер**

● Кешеләр бер-береһен меңәрләп үлтергәндә ситтән ҡарап аптыраусылар, йәки ярҙам итеп тороусылар барҙа һуғыштар туктамаясаҡ.

**П. Буаст**

● Һәр һуғыш - енәйәт, бер еңеү ҙә уны аҡламай.

**А. Франс**

**✓ Егеттәр менән "Әйҙә, беҙ ҙә әҙер окоптарына баҫып инеп, рәхәтләнеп йәшәп алайыҡ", тип һөйләштек тә, ниместе кире ҡыуырға булдыҡ. Бөтәбеҙ бер һүҙле булғас, эштәр яйға китте.**



ҡаршы йән әсеүҙәрен бәләкәй хәреф менән яҙып булһа ла, Гитлерҙән шулай үс алдылар.

## Олатайымдың балаларын белмәйем

Тормош һабаҡтары дәресендә "Шәжәрә" темаһына дәрес бара. Балаларға олатай-өләсәйҙәренең балаларын теҙеп яҙырға ҡушыла. Динар уйланып ултыра икән. "Ни эшләп яҙмайһың, Динар?" - тип һорай уҡытыусы. "Өләсәйемдең балаларын яҙҙым да ул, олатайымдың балаларын белмәйем шул", - ти икән бала.

## "Самауыр билмәне"

Оло ғына һуғыш ветеранының ғаиләһендә магазиндан һатып алынған билмән бешерәләр. Аталары: "Был билмәнегеҙҙең тәме лә булманы, ауыҙға ла элэкмәне, самауыр билмәне бешереп ашатығыҙ", - тигән. Ауылда билмән өсөн йәйелгән өшәне, ғәҙәттә, самауыр комфоркаһы менән киҫәләр. Билмәндәр ҙур була. Ҙур булғас, ите лә мул була. Бабайҙың шундай билмән ашағыһы килгән, күрәһең.

## "Да, да, лук, лук!"

Хәлил ауылы З. апайҙың күршеһе Н. ағай Мәғниткә балаларына мәктәп формаһы һәм башҡа кәрәкъяраҡ алырға бара. Әйберҙәрен алып бөткәс, аҙыҡ-түлек магазинына инә, һуған алып ҡайтырға кәрәк.

Сиратка баҫа. Сираты етеп килгәндә генә һуғандың урыҫсаһын онота ла ҡуя. Сираты етә - иҫенә төшөрә алмай ҙа ҡуя бит. Һатыусы ҡыҙ аҙыҡтарҙы берәм-берәм күрһәтеп: "Ошомо?" - тип һорай. Артынан сиратта торған мәрйәләр ҙә: "Скажите же, что вам нужно?" - тип ҡарай, ағай ыҡ-мыҡ итеп тик тора. Шул ваҡыт бер мәрйә эргәһендәге мәрйәгә хәбәр һөйләгәндә, "лук" һүҙен әйтеп ысҡындыра. Беҙҙең ағай ҡыуанысынан: "Да, да, лук, лук!" - тип ҡыҫыра башлай. Һатыусы, көләмһерәп, һуған үлсәп бирә, һиҙгәндер инде башҡорт кешеһенең һуғандың русса атамаһын онотоп торғанын.

## "Булыр әле, булыр, апай, ҡайғырма..."

Ирәндек ҡуйынында ятҡан Шаҙығай ауылынан Сәрби (85 йәш) һәм Тайба (70 йәш) инәйҙәр ауылдан 2 саҡрымда урынлашҡан ҡымыҙ фермаһынан ҡайтып бара. Йәйҙең иң матур сағы. Баштарына ҡымыҙҙың көсө киткән инәйҙәр ултырып ял итергә була. Тормош хәлдәре, бабайҙарынан иртә ҡалыуҙары, ошо ауылға килен булып төшөп, бәхетле ғүмер иткән саҡтары тураһында һөйләшәләр. "Бабайың һуғышта ҡалһа ла, һин бәхетле: 4 ҡыҙ менән ҡалып, үҫтерҙең уларҙы. Минең бит, ҡыу томшоҡтан бер балам да булманы", - ти Сәрби инәй. Уға ҡаршы Тайба инәй: "Булыр әле апай, булыр, ҡайғырма", - тигән. Быларҙың һөйләшкәнен шул тирәлә йылҡы көтөүсе егеттәр ишетеп ҡалған. Һүҙ лаҡапка әйләнде һуңынан. "Булыр әле, апай, булыр...". Хәлил ауыл Советына ҡараған ауылдарҙа әйтәләр уны. Ә инәйҙәр 100 йәшкә етә яҙып, ҡәҙер-хөрмәт күреп, донъя ҡуйҙы. Сәрби инәйҙе туған тейешле кешеһенең улы ҡараны. Ә Тайба инәйҙе ҡыҙҙары, ҡыҙҙарының балалары, ҡараны. Һәйбәт кешеләр ине - Хоҙай имандарын юлдаш итһен.

## "Улы академик, әсәһе - алкоголик..."

Асҡар ауылында бер ҡатын ваҡыты-ваҡыты менән эсештереп ала торғайны. Бер ныҡ эсеп, үлемесле булып ауырып ятҡанында улы килеп ингән хәл белергә (Был турала ҡатын үҙе һөйләне). Улы "Тиҙ ярҙам" машинаһын саҡырған да илай-илай өгөтләй икән: "Әсәй, ниңә эсәһең, атайым ҡартайған, уға 70 йәш, һин үлеп китһәң, уны кем ҡарай, беҙ туған йортобоҙға кем тип киләбеҙ? Һин бит әле йәш, саҡ 55-ең тулды". Аҙаҡ улы асыу менән өҫтәп ҡуйған: "Улы - академик, әсәһе - алкоголик!".

"Улымдың илай-илай әйткән һүҙҙәре шул хәтлем тетрәндерҙе - эсеүемде ташланым", - ти танышым.

## Һеҙҙе атырға өйрәтмәгәндәр

Һуғышта разведчик булған колхоз рәйесе менән моряк кейемендә ҡайтҡан бер ағай һунарға сезон асылғас, Ирәндеккә һунарға китәләр. Бер ағас ботағында ҡорға оҡшаған ҡош ултырғанын күреп ҡалалар.

- Әйҙә, моряк, һин атып төшөр анау кошто, - ти колхоз рәйесе.

Моряк ата ла ата, патрондары бөтә. Тейҙерә алмай: ҡош тик ултыра, ҡоламай.

-Тәки тейҙерә алманың, һеҙҙе атырға өйрәтмәгәндәр, иптәш моряк.

Ағас ботағында ултырған "кош" ҡараҫҡы булып сыға. Рәйес ағай уны бер көн алдан килеп ултыртып ҡуйған була.

- Һин разведчиклығыңды күрһәттең. Аҫтыртын, әҙәм күрмәгәндә бер кемдең дә башына килмәҫтәйҙе эшләп ҡуйғанһың, иптәш гвардия өлкән лейтенанты, - тигән моряк.

Был ике ветерандың бынан элек тә, һуң да мәҙәктәре күп булды. Уларҙыҡы ғынамы һуң, бөтөн Хәлил ауылы халҡын мәҙәксе тиергә була. Үкенескә ҡаршы, әлеге ике етәксенең (бигерәк тә, разведчигының) ғүмерҙәре ҡыҫҡа булды. Уларҙың яҡшылыҡтарын, ҡыҙыҡлы ла, ҡыҙғаныс та хәлдәрен, төрлө мәҙәктәрен ауылдаштары онотмай. Ауылдың абруйлы кешеләре ине улар. Разведчигы - Дәүләтов Ғәбделхай, моряғы - Йәнбирҙин Насибулла атлы ине...

**Нәғимә ИЛЬАМОВА,**
Әбйәлил районы
Асҡар ауылы.

ҺАБАҠТАР

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ

## Яугир ҡыҙыҡтары

**Башҡаларҙан холоҡ-фиғеле менән айырылған, үҙ шәхесенә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған, үҙенсәлеклеге менән ылыҡтырған, йәшәү дәрте менән һоҡландырған, тәбиғәте менән сәйерҙәрҙе "ҡыҙыҡ кеше" тиҙәр беҙҙең яҡта. Баймаҡ районының Яңғаҙы ауылынан Трудасимов ағайҙы белмәгән, уның тураһында ишетмәгән, уны иҫкә алғанда, ихлас йылмаймаған кеше юҡтыр. Трудасимов ағай - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, алсаҡлығы, тәкүәлеге, мәрәкәселлеге менән яҡташтары араһында хөрмәт яулаған шәхес.**

Ғүмерендә Баймаҡ, Сибай яғына аяҡ баҫмаған, унда донъя бармы, булһа ниндәй икәненә иҫе лә китмәгән кеше, һуғыш күргән ағайҙың мажараларына һоҡланып та, аптырап та, мәңгелеккә уйылырлыҡ тәьҫораттар менән ҡайта. Төрлө йыйын-ҡунаҡтарҙа күргәнишеткәндәре тураһында мәҙәк итеп һөйләр булған ул. Тәбиғәттән һүҙгә маһирлығы, үҙен дә, кешене лә ышандырырлыҡ итеп хисләнеп бәйән итеүе, шыттырыуҙары, уйҙырмалары тыңлаусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған. Ул һөйләгән мәҙәктәр ауыҙҙан-ауыҙға йөрөп, колактан-колакка яғылып, сағыу тел мираҫы булып һаклана.

Һөйләүҙәре буйынса, ул дөйөм йыйылыу пунктында командаларға тәғәйенләп, обмундирование алғанда уҡ үҙенең талапсан, төпсөн, хужасыл булыуын күрһәткән. Ғүмерендә яҡшы кейемгә, бигерәк тә аяҡ кейемена йәлсемәгән кеше, ике пар итек алам, тип ғауға ҡуптарған, тиҙәр. Шулай булмай, оҙон юлда туҙһа, яңыһын ҡайҙан алһын.

- Һуғыш башланған йылы булды иң ҡыйыны, - тип һөйләй Трудасимов ағай, - бер ауыл янында оборона тоторға бойороп киттеләр. Тотабыҙ уны, ниңә тотмаҫҡа, ти. Әйҙә, килеп ҡараһын нимес, күрмәгәнен күрер, тип эшкә керештек. Окоптар ҡаҙып, блиндаждар төҙөп, ашарға ғына ултырғайныҡ, башланды бит мәшхәр. Баш күтәрергә лә әмәл юҡ. Үҙебеҙ өсөн тырышып, йәтешләп эшләгән урынды ташлап, сигенергә тура килде. Исмаһам, бер көн йоҡлап булманы шунда. Яңынан барып урынлашкан ерҙә шул уҡ хәл. Был ни ғәләмәт? Беҙ ыҙалап төҙөйбеҙ, нимес килә лә, бәрәстәрҙе ҡыуған кеүек баҫтырып сығара ла ебәрә. Беҙ әллә уларға ялланғанбыҙ инде. Эй, йән көйә. Мәскәүгә яҡынлашҡан һайын ер ҡаҙыу эштәре байтаҡ ауырайҙы, буйтым ялҡытты. Иркенләп ҡаҙыу түгел, тупраҡ ташларға урын юк: таш та асфальт, тимер ҙә бетон. Бигерәк ҡыҫтау ерҙәре. Ҡайҙа малдарын көтәләр ҙә, ҡайҙа һабантуйҙарын үткәрәләр икән? Егеттәр менән "Әйҙә, беҙ ҙә әҙер окоптарына баҫып инеп, рәхәтләнеп йәшәп алайыҡ", тип һөйләштек тә, ниместе кире ҡыуырға булдыҡ. Бөтәбеҙ бер һүҙле булғас, эштәр яйға китте.

Бер таптыр уларҙы һыу эскеһеҙ итеп тукмап алғайныҡ, мөгөҙөнән тотоп быраҡтырылған колхоздың племенной үгеҙе һымаҡ булдылар. Окопка ырғып төшһәм, мылтығын миңә тоҫҡап, бер ҡараҫкы тора. Эх, йән көйгә! Мин ҡаҙған окоптарҙа рәхәтләнеп йәшәп килде лә, хәҙер ишшү миңә мылтыҡ тоҫҡап тора, ҡороғор. Шул тиклем йәнем көйҙө, мылтығымдан атырға ла онотоп, ҡуһәк менән һуккан кеүек тондорҙом. Мылтығы бер яҡҡа, үҙе бер яҡҡа осто теге хәрәсән. Яткан еренән ҡулдарын күтәреп "Трудас! Трудас!" тип ҡыҫҡырмаһынмы. "Ә-ә-ә, Трудас ағайыңды яңы таныныңмы?" тип, елкәһенән элэктереп торғоҙҙом да, артына тибеп ебәрҙем. Осаһын ыуа-ыуа иланы, бахыр. Башҡалары ла илай-илай ҡулдарын күтәрҙе, сразы танынылар. "Ай-һай, ажар егет икәнһең", тип үҙебеҙҙекеләр ҡулымды ҡыҫты. Арьяғына ҡыйын булманы. Һөжүмгә күтәрелһәк: "Трудас, Трудас! Гитлер капут!- тип, ҡоралдарын ташлай ҙа, мин типмәһен, тип, лыпын ултыра ла ҡуя торғайнылар.

Бер тапкыр шулай окоптағыларын пыран-заран килтереп борҡотоп сығарғас, блиндажға барып индем. Өҫтәл артында колхозыбыҙҙың өйөр айғыры һымаҡ мыкты, тос кәүҙәле күҙе аларған берәү ултыра. "Һин дә, хох!" тигәйнем, теге ялтарып ҡасып бара. Әх, суҡынғыры, ағайыңды танымаһаң әле, тип, арт һанына элэктерҙем. Аҡырып илап, бер ишеккә инеп китмәһенме. Минең өйҙәй тимер шкаф икән. Күргәпкөргәп сығара алманыҡ. Эстән бикләнде лә ҡуйҙы, кәһәрең. Оҙаҡ уйлап тормай, шкафы-ние менән машинаға тейәп Сталинға ебәрҙек. Үҙе һөйләшһен генералдары менән, ә һалдаттарын үҙебеҙ тәрбиәләрбеҙ. Аҙаҡтан миҙал биргәндә командир һөйләне. Сталин генералдан: "Нишләп шкафка йәшерендең?"- тип һораған. "Эй, Трудас ныҡ тибә бит",- тип яуаплаған ул.

Мәрәкәне аңламаған бер аҡыллы баш уны фашларға булған икән. Йәнәһе, ниместәр "Трудас!" тип ҡысҡырмаған, ә үҙҙәрен ябай кеше "Трудящийся из рабочих" икәнен белдереү максатында, телгә яраклаштырып, "Труд аус", тип ҡысҡырғандар, йәнәһе. Трудас ағай ҙа, уны белгән яҡташтары ла ул аҡыллы башҡа ышанмаған. Эйе, ниңә йоморҡтанан йөй эҙләргә? Ҡыйыулыҡҡа, саялыҡҡа бер ниндәй ҙә дәлил кәрәкмәй. "Трудас!" тип, аялауҙы, ярлыкауҙы һорап ҡысҡырған баҫкынсы дошман ябай башкорт һалдатынан. Был - мәслихәт!

Эскерһеҙ шаян ағай әҙерәк "һелтәп" алһа, "Ул әтрәгәләмдәрҙе өйөрә менән окоп буйлап типкеләп алып йөрөй торғайным", тип һөйләр булған. Ихлас күңелле кеше нимә һөйләһә лә, башҡалар уны иғтибар менән тыңлап, хәйләһеҙ, мәкерһеҙ хәбәрен күңеленә яҡын ала, зыян көтмәй. Ундайҙарҙы бер ҡатлы, еңел холокло тип уйлаусылар ҙа табыла. Әммә, асылда, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Күңел дәртен ҡыҙғанмайынса башҡаларға өләшеүсе үҙенә кешеләрҙе ылыҡтыра. Кешенең яҡшылығы кеше араһында йәшәй, аламалығы үҙе менән ерләнә.

Таш күңеллеләрҙән таш йылғалар ғына ҡалыр, тигәндәй, эскерһеҙ, йәнендә үҙе өсөн генә түгел, башҡаларға өләшерҙәй дәрте булған хикмәтле кеше, халыҡ иҫендә "ҡыҙыҡ кеше" булып, яҡты хәтер ҡалдырыуы бер ҙә ғәжәп түгел.



**Урал МОСТАФИН.**

**(Дауамы. Башы 14-16-сы һандарҙа).**

● Һуғышты башлаусылар үҙҙәре лә шул ауға эләгә.
**И. Дамаскин**

● Ҡорал сыңлағанда закондар йоҡлай.
**Цицерон**

● Ил тыныс булғанда, улы - атаһын, һуғыш килһә - атаһы улын ерләй.
**Ф. Бэкон**

● Һәр һуғыштың ҡан тамыры буйлап акса әйләнә.
**Петр I**

● Беҙ һуғышты бөтөрмәһәк, һуғыш беҙҙе бөтөрәсәк.
**Г. Уэллс**

● Ут һәм ҡорал менән барған һуғыштарҙан да ҡурҡынысыраҡ һуғыш бар. Ул - диндәр араһындағы ҡанһыҙ һуғыш.
**Э. Геккель**

● Дошман юкта һуғыш та булмай.
**Лао-цзы**

● Һуғыш үтә лә ҡатмарлы нәмә. Уны хәл итеүҙе хәрбиҙәргә ышанып тапшырырға ярамай.
**Ш. Талейран**

● Тел менән сисеп булмаған сәйәси төйөндө теш ярҙамында тағатыу ысулы һуғыш тип атала.
**А. Бирс**

● Һуғыш ирҙәрҙән дә, ҡатындарҙан да яһакты бер микдарҙа һура. Берәүҙәренең - ҡанын, икенселәренең - күҙ йәшен.
**У. Теккерей**

● Һуғыш хәҡикәтте һәм кешелеклелекте инкар итә. Кеше бит һуғышһыҙ ҙа үлә. Һуғыш кешелек аңына нәфрәт менән алдашыу тойғоһон һеңдерә.
**Д. Неру**

*ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНӘН*

# КҮРҺӘТЕГЕҘ ӘЛЕ ИЛДЕ,

## йәки Рәсәй тураһында ни беләбеҙ?

**Әрме**

▶Рәсәй әрмеһе офицерҙарының 92 проценты асыҡтан-асыҡ һәм туранан-тура ил-төбәк етәкселәренә ҡаршы. Илебеҙҙә 1500 генерал бар. 2005 йылда дәүләт ҡаҙнаһының 19 миллиард һумын тап әрме системаһында "урлағандар". Төрлө енәйәт һәм "бабайлыҡ" арҡаһында былтыр ғына әрме сафтарында 1 964 хеҙмәт итеүсе һәләк булған. Уларҙың 376-һы үҙ-үҙенә ҡул һалған. Һалдат әсәләре комитеты белдереүенсә, 1999-2005 йылдарҙа Чечняла 16 500 һалдат вафат булған. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: үлтерелгән боевиктар (улар ҙа беҙҙең ил граждандары бит) һаны айырым иҫәпләнә, һуңғылары 15 800 кешене тәшкил итә.

**Мәғариф**

▶Үҫмерҙәрҙең 70 процентттан күберәге хроник сирҙәр менән ауырый. Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы белдереүенсә, ил уҡыусыларының 16 проценты бер тапҡыр булһа ла наркотик ҡулланып ҡараған, һуңғыларының 8 проценты өмөтһөҙҙәр төркөмөнә ҡарай, ә 3,1 проценты иһә наркотикһыҙ бөтөнләй йәшәй алмай. Былтыр Рәсәйҙә саманан тыш наркотик ҡулланып 112 мәктәп уҡыусыһы үлгән. Студенттарға килгәндә: уларҙың 30 проценты наркотик ҡуллана, 20 проценты өмөтһөҙҙәр риск төркөмөнә ҡарай һәм 4,8 проценты наркотикһыҙ йәшәй алмай.

▶Берҙәм дәүләт имтиханын иң максималь билдәгә - 100 балға 496 бала тапшырған, был БДИ тапшырған 830 415 уҡыусының 0,05 процентын тәшкил итә.

▶2003 йылда янғын хәүефһеҙлеге талаптарына яуап бирмәү арҡаһында Рәсәйҙә 13 мең мәктәп ябылған. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы 150 мең мәктәпте тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. Иң ҡурҡыныс мәктәптәр исемлегенә ауыл мәктәптәре инә, сөнки уларҙың күпселеге Бөйөк Ватан һуғышынан һуң төҙөлгән ағас мәктәптәр. Сергей Шойгуның һүҙҙәренә ярашлы, бындай мәктәптәр яҡынса 30 процент тәшкил итә.

**Фән**

▶Эксперттар белдереүенсә, яҡынса 20 мең Рәсәй ғалимы Европа Берлеге илдәренә хеҙмәт итә. Улар шул уҡ мәлдә Рәсәй дәүләтенең ғилми хеҙмәткәрҙәре булып иҫәпләнә.

Economist Intelligence Unit һәм IBM корпорацияһы докладына ярашлы, былтыр мәғлүмәти технологиялар ҡулланыу буйынса Рәсәй иҡтисади үҫештә булған 64 ил араһында 48-се урындан лайыҡлы 55-се урынға тәгәрәп төшкән.

▶Рәсәй ғаиләләренең 2 проценты Интернет менән ҡуллана. Һәр йөҙ кешегә 13 компьютер тура килә.

▶Фән өлкәһендә эшләүселәр иҫәбе буйынса Рәсәй донъяла 3-сө урынды биләй - 1 миллион халыҡҡа 3 494 ғалим тура килә. Тәүге урындарҙы Норвегия менән Швеция биләй. Беҙҙә һәр 1 мең кешенең 40-ы ғына Интернет селтәре менән ҡулланһа, шул уҡ Норвегияла 502 кеше һәм Швецияла 573 кеше донъя селтәренә даими сыға.

**Төрлөләрҙән**

▶Рәсәй бизнес-элитаһы араһында һуңғы мода күренеше: Лондонда фатирҙар һәм өйҙәр һатып алыу. Өйҙәрҙе үҙҙәре, Англияла уҡыған балалары, йәки арендаға биреп тороп өсөн һатып алалар. Һуңғы йылдарҙа Лондонда һатылған һәр 15-се торлаҡты рәсәйҙәр һатып ала. Knight Frank тикшеренеүҙәре буйынса, 2000 йылда "урыҫтар" Англияла 93 миллион фунтҡа өй-фатир һатып алһа, 2004 йылда был күләм 396 миллион фунтҡа барып еткән. Былтыр был сумма 799 миллион фунтты уҙған.

▶Банктарға һалынған аҡса йылына 12 процент ҡына килем килтереүгә ҡарамаҫтан, һәр бишенсе рәсәйле үҙ аҡсаһын банкта тота. Һәр алтынсыбыҙ аҡсаһын юрған аҫтында һаҡлай. Ә халыҡтың 60 проценты бөтөнләй аҡса һаҡламай.

▶2006 йылдың башында Globescan йәмәғәт фекерен өйрәнеү компанияһы 33 илдә 39 435 кешенең фекерен өйрәнгән. Уға ярашлы, донъяла иң популяр булмаған илдәр исемелегенә Иран, АҠШ һәм Рәсәй ингән. Беҙҙең илгә ҡарата иң күбе Финляндияла, Францияла, Польшала, Великобританияла һәм Көньяҡ Корея насар ҡараш һаҡлана. Беҙҙе иң ныҡ яратҡан ил тип Нигерия иҫәпләнә.

*БАҠСА*

# Ә БЫЛ СЕРҘӘР...

## мул уңышҡа нигеҙ

**Профессиональ баҡсасылар бәләкәй генә биләмәлә лә мул уңыш үҫтереп була, ти һәм иң ҡулайлы серҙәре менән бүлешә:**



●Юғары уңышҡа өлгәшеүҙең иң төп сере - яҡшы сифатлы тупраҡ. Ерҙең уңдырышлылығы уның органик ашламаларға ни тиклем бай булыуынан тора. Тупраҡ ҡатламын органик ашламалар менән тәрәнерәк туйындырған һайын - уңышы мулыраҡ. Тамыры нисек - емеше шулай.

●Түтәлде бейегерәк эшләгән һайын уңышты күберәк йыйырһың. Бының өсөн баҡса ерен ике тапҡыр яҡшылап ҡаҙырға кәрәк. Тупраҡ 60 см тәрәнлектә йомшартылып, түтәл 5-25 см ҡалҡып торорға тейеш. Бейек түтәлдәрҙә үҫентеләрҙе бер-береһенә яҡынираҡ ултыртыртырға мөмкин. Был бер-береһенең күләгәһенән дә һаҡлаясаҡ, һыу һипкәндә һыуҙы ла буш ергә сарыф итмәйәсәк.

●Баҡсаны түтәлдәр серияһында планлаштырыу ер майҙанын экономиялауға булышлыҡ итә. Ә рәтләп ултыртҡанда рәт аралары өсөн ҡалдырылған урын әрәм була. Түтәлдәрҙе ағас рам эсенә яһау айырыуса файҙалы - ашлама һәм һыу ситкә китмәй.

●Түтәлдәрҙең ниндәй булыуы ла әһәмиәтле. Түңәрәк түтәлдәр отошло. Сит-ситтәре буйлап үрмә йәшелсә һабаҡтары ла, салат, шпинат япраҡтары ла иркен үҫә ала.

●Түтәл өҫтөнә үҫемлектәрҙе дөрөҫ ултыртырға кәрәк. Белгестәр уны рәтләп йәки дүрткел итеп ултыртырға кәңәш итмәй. Өҫкөл итеп урынлаштырған хәлдә һәр түтәлдән 10-14 процент



күберәк уңыш алырға мөмкин.

●Үҫентеләрҙе тығыҙ ултыртыуҙан һаҡланығыҙ. Яҡын сәселгән йәшелсәләр бер-береһенә үҫергә ҡамасаулай һәм ашламаларҙы тулыһынса үҙләштерә алмай. Шулай уҡ ҡоротҡос бөжәктәр, ауырыуҙар күсешендә лә тиҙерәк бирешә.

●Бер сезон эсендә бер үк түтәлдә бер нисә йәшелсә үҫтерә белеү күп төрлө уңыш алыуға килтерә. Мәҫәлән, иртә яҙҙан ултыртыла торған салатты үҙ мәлендә файҙаланып, урынына тиҙ өлгөрөүсән кукуруз сәсергә мөмкин. Бынан һуң ул ерҙе яҡшылап таҙартып, ҡышлаусы һарымһаҡ ултыртырға була. Әммә һәр сәсеү араһында тупраҡҡа ашлама индерергә кәрәк.

●Бөтә йәшелсәләрҙе лә иң тәүҙә үҫенте рәүешендә үҫтереп алыу отошло. Түтәлгә сығарып ултыртҡанға тиклем ул нығый һәм, күләгәләр хасил итеп, суп үләндренә үҫергә ҡамасаулай.

●Ерҙе бер ҡасан да ныҡ ел булғанда ҡаҙмағыҙ: тупраҡ дымы кибә. Шулай уҡ ямғырҙан һуң да ерҙе һөрөү, ҡаҙыу файҙаға түгел - һыу тәрәнгә үк һеңеп бөтөргә тейеш.

●Яҙ көнө ерҙе ашлап, түтәлдәр яһап бөткәс тә орлоҡ сәсергә йәки үҫенте ултыртырға ашыҡмағыҙ, суп үләндәре сыҡҡансы көтөп тороғоҙ. Уларҙы утағандан һуң ғына сәсеү эшенә тотоноғоҙ.

●Ултыртҡан борсаҡтарығыҙҙы ҡоштар ашамаһын тиһәгеҙ, сәсерҙән алда уларҙы һарымһаҡ төнәтмәһенә тығып алығыҙ.

●Яҙ һайын ҡыуаҡтың өс-биш кенә тармағын ҡалдырып, ҡалғандарын төбөнән һындырып торһағыҙ - ул шау сәскә атасаҡ.

●Иртә яҙҙа башлы һарымһаҡ ултыртҡанда тырнаҡтарын сәсерҙән алда ғына айырығыҙ,



юғиһә, шытмай ҡалыуы ихтимал.

●Һуған ултыртҡан түтәлдә һуған себендәренән ҡотолорға теләһәгеҙ, яҙ көнө ерҙе ҡаҙғанда тоҙ һибегеҙ. Йәй тағы ла өҫтәгеҙ. Тағы бер алым: һуған менән кишерҙе йәнәш рәтләп сәсегеҙ (һуған-кишер, һуған-кишер)- улар бер-береһен ҡоротҡостарҙан һаҡлай.

●Әгәр ҙә ҡыяр түтәленә әҙ генә көнбағыш сәсһәң - ҡыярҙың уңыш биреү ваҡыты оҙайыр һәм мул уңыш бирер.

●Баҡсағыҙ төнгө һалҡынға бирешмәһен өсөн, кисен түтәлдәргә яҡшылап һыу һибеп ҡуйығыҙ.

●Картуф баҡсаһын көҙ көнө үк тиреҫ менән яҡшылап ашлағанһығыҙ икән - эрерәк бүлбеләр сәсегеҙ, әгәр тиреҫ етерлек кимәлдә түгел икән - вағыраҡ бүлбеләрҙе һайлағыҙ һәм уларҙы бер-бе-



реһенә яҡынираҡ ултыртығыҙ.

●Алмағас менән сейә ҡыуаҡтары араһын йыраҡ ултыртырға кәрәк. Уларҙың тамырҙары бер-береһенә насар йоғонто яһай.

●Шалҡанды ер ҡарҙан әрселгәс тә сәсеү хәйерле. Ул һалҡынға бирешмәй, әммә ер беттәре сыға башлағансы нығынып ҡалмаһа, зарар күрә. Әгәр иртә яҙҙан ултыртырға өлгөрмәгәнһегеҙ икән, июнь башына ҡалдырығыҙ - ул ваҡытҡа был ҡоротҡостар һирәгәйә, ә шалҡан көҙгә тиклем барыбер ҙурайып өлгөрә.

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

## Көсһөҙ заттың... мейеһе

**Ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөрәге һәм мейеһе төрлөсә урынлашҡан һәм уларҙың эшмәкәрлеге лә бер-береһенекенән айырыла.**

Ҡатын-ҡыҙ мейеһе ирҙәрҙекенән бәләкәйерәк һәм төҙөлөшө лә үҙенсәлекле. Ғалимдар хәҙер махсус приборҙар ярҙамында ике заттың мейеһе төрлө кисерештәргә нисегерәк әһәмиәт бирә икәнен теркәй ала. Ҡайғырыу, йән әрнеүен ҡабул итеүсе күҙәнәктәр ҡатын-ҡыҙ мейеһендә ирҙәрҙекенә ҡарағанда һигеҙ тапҡырға күберәк. Шуға ла гүзәл зат депрессияға ла тиҙ биреләүсән. Ә шулай ҙа ҡатын-ҡыҙ төрлө тетрәнеүҙәрҙе тиҙ еңә. Ни өсөн тигәндә, уларҙың йәшәүгә көсө сабыйҙарын үҫтереү, уларҙы аяҡҡа баҫтырыу теләгенең көслө булыуынан килә. Ир-аттар араһында үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда 6 тапҡырға күберәк булыуын уларҙың күңел төшөнкөлөгөн еңергә көс тапмауы менән аңлаталар.

## Артыҡ һүҙҙәр

**Ҡатын-ҡыҙ һәр һүҙгә әһәмиәт биреүсән, сөнки мейеһенең ике ярымшары ла әүҙем эшләй.**

Тест үткәргәндә уларға синонимдар уйлап сығарыу еңел булыуы асыҡлана. Ғалимдар тап ошо үҙенсәлек ҡатын-ҡыҙға мейе травмаһынан йәки инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға ярҙам итә, тип иҫәпләй.

Психологтар, ғаиләлә төрлө ғауға ҡубыуы гүзәл заттың һәр һүҙгә әһәмиәт биреүенә бәйле, ти. Ҡатын-ҡыҙға бер туҡтамай һөйләп, ҡайғы-шатлыҡтары менән уртаҡлашыу теләге хас, ә ир кешенең "ваҡтөйәк һүҙ"ҙе тыңлағыһы килмәй, шуға ла ул ҡатынын тыңламайынса, икенсе бүлмәгә инеп китһә, тегеһе мотлаҡ үпкәләй һәм ыҙғыш башланыуын көт тә тор.

Проблемалары булһа, ирҙәр, ғәҙәттә, үҙ эсенә йомолоусан. Ҡатыны яҡшы ниәттән тынысландырырға маташһа ла, йәне көйөп, уға екереүе йәки бөтөнләй өндәшмәүе мөмкин - был да конфликтҡа юл аса.

## Төтөн менән осҡан...һаулыҡ

**Йөрәк ауырыуы - күп үлемгә сәбәпсе. Яман шештән үлеү икенсе урында тора.**

Рәсәйҙә яман шеш башлыса ирҙәр ғүмерен ҡыя. Улар күберәк дауалауы ауыр булған ашҡаҙан һәм үпкә яман шешенә дусар. Ә ҡатын-ҡыҙҙарҙа күберәк һөт биҙе яман шеше киң таралған, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уны дауалау мөмкин түгел.

Иң ҡурҡынысы - замана ҡатын-ҡыҙҙарының тәмәке тартыуы. Был уларҙа үпкә, ауыҙ ҡыуышлығы, ҡыҙыл үңәс яман шеше барлыҡҡа килтерә. Үпкә яман шешенән 100 мең ирҙең 60-ы яҡты донъя менән хушлашһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙа ул 100 меңгә 7 кеше генә тура килә.

***✓ Кешелек был һуғышта 55 миллион халыҡты ҡорбан итте. "Холокост ревизионистары" билдәләүенсә: һуғыш осоронда вафат булған йәһүдтәрҙең ысын иҫәбе 6 миллион түгел, ә яҡынса 500 мең кеше.***

*ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!*



# ҺУҒЫШ ТУРАҺЫНДА ДҮРТ МИФ,

## йәғни ялған тарих ксенофобия тәрбиәләй

**Бала саҡта беҙгә немецтарҙың "һә" тигәнсә Мәскәүгә килеп етеүе хаҡында күп һөйләнеләр, уның сәбәптәрен аңлаттылар. Тарих уҡытыусыһы һуғыштың тәүге аҙнаһында беҙҙең яҡтан 5 миллионлап һалдаттың үлеүе хаҡында һөйләүен яҡшы хәтерләйем. Һуғыштың тәүге аҙналарында Геббельстың махсус пропагандаһын яҡтыртҡан листовкалары тонналап ташланған. Йәғни ул ваҡытта уҡ уйҙырма мифтар бихисап булған. Еңеү Көнө алдынан гәзит уҡыусыларыбыҙҙы ошондай мифтарҙың иң сағыуҙары менән таныштырырға булдыҡ.**

### ●БЕРЕНСЕ МИФ

**Сталин Гитлерҙан алда һуғыш башларға йыйынған.**

Ысынлап та, Советтар Союзы Германияға ҡаршы һуғышты беренсе булып башларға, тигән план ҡорғанмы? Уйҙырманы таратыусылар, ғәҙәттә, ниндәйҙер документтарға һәм һуғыш алды уставтарына һылтана. Рәсәй архивтарында һаҡланған документтар иһә уларҙың ялған икәнлеген билдәләй. Сөнки был хаҡта бер документ та, Сталинға тәҡдим ителгән һәм уның тарафынан имзаланған оператив пландар ҙа юҡ. Шулай уҡ ил сигендә тороусы хәрби частәрҙең дә бындай документтары юҡ. 1939 йылғы Уставта былай тиелгән: "Әгәр ҙә дошман беҙгә һуғыш асһа, Ҡыҙыл Армия иң көслө ғәскәр буласаҡ. Һөжүм итеп, дошманды ҡыйратасаҡбыҙ". 1941 йылдың 15 майындағы сығышында Сталин былай ти: "Илебеҙҙе һаҡлау өсөн беҙ һөжүм итергә тейешбеҙ...." Превентив һуғыш яҡлылар шул саҡтағы совет документтарын һәм пландарын "анализлағанда", "әгәр", йәки "һуғыш башланған осраҡта", тигән һүҙҙәрҙе күрергә теләмәй. Ул осорҙа Ҡыҙыл Армияның превентив һөжүм яһарлыҡ ҡеүәте лә, тейешле кимәле лә булмаған. 1941 йылдың июнь-июль айҙарындағы хәлваҡиғалар быға асыҡ дәлил.

### ●ИКЕНСЕ МИФ

**6 миллион йәһүд ҡырылған**

Гитлер үҙе яртылаш йәһүд һәм Ротшильдтың ейәне булған. Уның атаһы яғынан өләсәйенең атаһы Шикельгрубер (диндә һалым йыйыусы) фамилиялы була. Ошо факт ҡына уйланырға мәжбүр итә.

Рәсми тарихта "холокост" атамаһы бар. Ул Бөйөк Ватан һуғышында немецтарҙың йәһүдтәрҙе белә күрә ҡырғанын аңлата. Боронғо грек теленән ингән "холокост" һүҙе боронғо йәһүдтәрҙә ҡорбанды утта яндырыуҙы аңлатҡан. Мифҡа ышанғанда, Икенсе донъя һуғышы мәлендә 6 миллион йәһүдте бер сәбәпһеҙ газлы камераларҙа үлтергәндәр булып сыға. 27 миллион совет гражданының һәм 9 миллион немецтың ҡырылыуына, ниңәлер, күҙ йомола. Хатта Освенцимдағы таҡтаташта тәүҙә "4 миллион" ҡорбан тип яҙылһа, һуңынан халыҡтан оялып, шым ғына 1 миллионға үҙгәртәләр. Әммә "холокост мифы" киң ҡатлам аңына ныҡышмал рәүештә һеңдерелеүен дауам итә. Уның маҡсаты шунан ғибәрәт: йәһүд халҡы һуғышта башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ зыян күргән һәм башҡа халыҡтар бының өсөн үҙҙәрен ғәйепле тип иҫәпләргә, үкенергә һәм уларға түләргә тейеш. Төптән уйлап фекер йөрөткәндә, "холокост" тураһындағы миф бар кешелекте рәнйетә, сөнки тик йәһүд халҡын ғына Бөйөк Ватан һуғышында төп ҡорбан итеп тасуирлай. Кешелек был һуғышта 55 миллион халыҡты ҡорбан итте. "Холокост ревизионистары" билдәләүенсә: һуғыш осоронда вафат булған йәһүдтәрҙең ысын иҫәбе 6 миллион түгел, ә яҡынса 500 мең кеше."Холокост" мифын булдырыусылар совет кешеләренең үлемен йөҙәр тапҡырға кәметә. Мәҫәлән, "Холокост энциклопедияһында" хәбәр ителеүенсә, немец лагерҙарында 3 миллион йәһүд һәм шулай уҡ бер нисә тиҫтә мең сиған һәм совет әсирҙәре үлгән, тиелә. Ысынында, 1944 йылға тиклем немец лагерҙарында 3,3 миллион совет һалдаты вафат була. Бөгөн "холокост" үҙенә күрә ялған дингә әйләнгән. Ҡайһы бер илдәрҙә холокосты фәнни яҡтан өйрәнеүселәр һәм уны инҡар итеүселәр хөкөмгә тарттырыла хатта.

Шулай уҡ, холокост индустрияһы аҡса һығыу ысулы булып тора. Рәсми статистикаға ярашлы, 1992 йылға тиклем Германия йәһүд ойошмаларына 85,4 миллиард немец маркаһы түләгән, рәсми булмаған һандар иһә унан да күберәк. 2000 йылдың авгусында Бөтә донъя йәһүдтәр конгресы үҙ иҫәбендә холокост өсөн 9 миллиард доллар компенсация аҡсаһы булыуын хәбәр иткән.

### ●ӨСӨНСӨ МИФ

**Һуғыш алдынан Ҡыҙыл Армия командирҙарын тулыһынса тиерлек юғалта**

Тарихты популярлаштырыусы ҡайһы берәүҙәр билдәләүенсә, Сталин режимы һуғыш алдынан иң әҙер хәрби кадрҙарҙы юҡҡа сығара һәм Ҡыҙыл Армия махсус хәрби белеме, тәжрибәһе булмаған командирҙар идаралығында ҡала. Был "аҡыллылар" әйтеүенсә, репрессияланғандар бик күп: ҡайһы бер сығанаҡтарҙа - 32 мең, ҡайһы берҙәрендә 100 меңгә тиклем барып етә. Рәсәйҙең Хәрби тарих институты мәғлүмәттеренә ҡарағанда, һуғыш алдынан репрессияланған хәрби етәкселәр һаны ул тиклем юғары булмай. Документтарға ярашлы, 1936 йылда бөтәһе 1410 командир репрессиялана, уларҙың 204-е төрмәнән тере сыға. Әгәр ҙә репрессияланмаған, әммә хәрби хеҙмәттән ҡыуылғандар һанын ҡараһаҡ, шул билдәле: яҡынса 32 мең офицер ҡыуылған, һуңынан уларҙың 12 меңе эш урынына ҡайтанан ҡайтарылған. 1938 - 1940 йылдарҙа Ҡыҙыл Армия 271,5 мең яңы командир менән тулыландырыла, был репрессияланғандарға ҡарағандарға тиҫтәләгән тапҡырға күберәк. Әгәр ҙә 1936 йылда юғары хәрби белемле офицерҙар һаны 13 мең кеше булһа, 1941 йылда был һан 28 мең тәшкил иткән. 206 мең офицер шул осорҙа урта хәрби белемле иҫәпләнгән. Ғөмүмән, 1936-1940 йылдарҙа Ҡыҙыл Армияла 2 046 205 хәрби хеҙмәт итә, уларҙың 20668-е (1,01 процент) хөкөмгә тарттырыла, Тимәк, командирҙар составының дөйөм кимәле үҫкән.

Шулай итеп, һуғыш алдынан Ҡыҙыл Армия "тулыһынса етәкселәрһеҙ ҡалған" йә "белемһеҙ, тәжрибәһеҙ командирҙар ҡулына ҡалдырылған" тип, һүҙ бутҡаһы бешереү урынһыҙ. Репрессиялар, әлбиттә, кире йоғонто яһаған, әммә һан буйынса түгел, рухи төшөнкөлөк булдырған.

### ●ДҮРТЕНСЕ МИФ

**Һалдаттарҙың күпселеге үҙ ирке менән әҫирлеккә бирелгән**

Совет хәрби әҫирҙәре хаҡындағы мәғлүмәтте махсус рәүештә ялған тараталар. Әсирҙәрҙең һаны тураһындағы бәхәс әле булһа ла тынмай. Төрлө тарихсылар тикшереүҙәренә ярашлы, Бөйөк Ватан һуғышы мәлендә әсирлеккә 4 миллиондан алып 7 миллионға тиклем совет һалдаты эләккән. Рәсәй Президенты янындағы Сәйәси репрессиялар ҡорбандарын ярлыҡау комиссияһы билдәләүенсә, һуғыш мәлендә 4 миллион 70 мең һалдат әсирлеккә эләгә. Һандарҙың бер-береһенән ер менән күк араһындағы кеүек айырылыуы иҫәпләүҙәрҙең төрлө булыуына бәйле. Мәҫәлән, немецтар хәрби әсирҙәр исемлегенә ғәскәргә бер ниндәй ҡағылышы булмаған ябай халыҡты ла индергән. Әйтәйек, һатыусыларҙы, тимер юлсыларҙы һәм башҡаларҙы. Немец етәкселәре бит беҙҙең һалдаттарҙың башҡа һыймаҫлыҡ рәүештә ҡаты һуғышыуын билдәләгән. Һуғыштың тәүге осоронда вермахт йәшен тиҙлегендә Балтика буйы илдәрен, Белоруссияны һәм Украинаны баҫып алғас, Ҡыҙыл Армия бер нисә ауыр еңелеү кисерә, шул осорҙа күпселек ирекһеҙҙән әсирлеккә эләгә. Ул ваҡытта ауыр бәрелештәрҙән, аслыҡтан хәлһеҙләнеп, идаралыҡ юғалыу һәм һуғыш кәрәк-ярағтары етешмәү сәбәпле, дошманға тейешле кимәлдә ҡаршылыҡ күрһәтелмәй. Әлбиттә, үҙ ирке менән әсирлеккә бирелеүселәр ҙә була, әммә дөйөм алғанда, улар аҙ кимәлдә. Быны ошо факт яҡшы дәлилләй: немец ғәскәренең "Үҙәк" төркөмө Совет хәрби әсирҙәре өсөн 38 лагерь эшләй, уларҙың икәүһе генә үҙ ирке менән бирелеүселәр өсөн тәғәйенләнә. Һәр лагерь иһә 400 кеше өсөн иҫәпләнгән була. Немецтарҙың мәғлүмәтенә ярашлы, әсирлектә 2 миллионға яҡын совет хәрбиҙәре үлә. Ҡасырға маташыу, йәки башҡа төрлө сәбәптәр арҡаһында 1 миллион кеше үлтерелә. 1946 йылдың 1 декабренә СССР-ға 1 миллион 835 мең хәрби әсир әйләнеп ҡайтҡан.

**Дилфүз СӨНӘҒӘТОВ.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Беҙҙең тарихты алдан фаразлап булмай, тип шаярта Михаил Задорнов. Ысынлап та, уҙған нәмәне нисек күрәҙәләп булһын, ти? Ул бит булған. Тарих. Ә ниңә улай булғас тарихи ваҡиғаларҙың төрлө версиялары барлыҡҡа килә? Тимәк, уларҙың ҡайһы берҙәре хаталы мәғлүмәткә таянған, йәғни ялғанға ҡоролған. Тимәк, кемдәрҙеңдер заказы буйынса "берҙән-бер дөрөҫлөктө" "өҫтән" билдәләйҙәр, ә Фәндәр академияһы, Тарих институты шуны тәҡдим итә. Шуға күрә төрлө аңлашмаусанлыҡтар тыуып ҡына тора. Ялған тарих иһә барыһын да ҡыйыш күрһәтеп, ксенофобия, йәғни бер милләт вәкилендә икенсе милләт вәкиленә ҡарата нәфрәт тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Фашизмды еңгән илдә фашизм орлоҡтары шулай сәселә бөгөн.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# Һәр көнөңдөң ҡәҙерен бел...

**Ауыр эш көнөнән һуң Джейн диңгеҙ буйына килеп, аҙыраҡ ял итеп алырға була. Пляжда ул Мелани исемле бәләкәй ҡыҙ менән таныша. Ярҙан алыҫ та түгел бер матур йортта әсәһе менән генә йәшәй икән ул. Алсаҡ күңелле, теремек ҡыҙыҡай менән аралашыу Джейнға бик оҡшай, уға ҡомдан ҡәлғәләр, йорттар төҙөп уйнарға өйрәтә. Бер көндө улар йылы ҡомда ҡыҙынып ятҡанда, яндарынан кәйелеп бер ҡарлуғас осоп үтә.**

- Шатлыҡ осоп бара,- ти бәләкәй ҡыҙ ҡыуанып.

- Нимә осоп бара тиһең?

-Шатлыҡ. Әсәйем ҡарлуғастар шатлыҡ килтереүсе ҡоштар, ти...

Ошо көндән һуң Джейн, ни эшләптер ҡарлуғастарҙы күргеһе килеп, диңгеҙ буйына ашығып булды. Кескәй Мелани менән ергә тейә яҙып аҫтан ғына кәйелеп осҡан ҡарлуғастарҙы күҙәтеп ултырырға ғәҙәтләнде. Был матур ҡоштарҙың ысынлап та, күңелгә ниндәйҙер кәйеф күтәренкелеге, шатлыҡ хистәре килтереүен тойҙо...

Бер көндө ауыр ҡайғыға бирелеп, диңгеҙгә текләп ултырған Джейнды күргәс, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәгән кескәй Мелани йүгереп килеп ҡосаҡлап ала:

- Джейн, әйҙә уйнарға,- тип ҡулынан тарта.

-Бөгөн үҙем генә ултырғым килә, яңғыҙымды ҡалдыр. Миңә бик ауыр, сөнки әсәйем вафат булды,- ти Джейн.

- Әсәйең үлгәндә һиңә бик тә ҡыйын булғандыр, эйеме?- ти ҡапыл күңелһеҙләнгән ҡыҙыҡай уның ҡайғыһын уртаҡлашырға теләп.

- Әлбиттә ҡыйын булды, кит янымдан, торма бында,- ти Джейн ҡыҙға тупаҫ итеп һәм кескәй Меланиға асыуы килеп, ырғып тора ла икенсе ергә барып ултыра...

Бер-ике аҙнанан Джейндың ҡайғыһы баҫыла төшә. Ул тыныслана һәм ололарса аҡыллы фекер йөрөтөүсе, көләкәс йөҙлө Мелани менән аралашыу етмәүен аңлап, диңгеҙ ярына килә. Үҙҙәре ҡыҙынырға яраткан урында Меланиҙы күрмәгәс, пляждан алыҫ түгел ерҙәге өйҙәренә килә.

Ишекте асҡан һылыу ҡатын менән үҙен таныштыра, һәм:

-Ҡыҙығыҙ менән яр буйында уйнай торғайныҡ. Меланиҙы шул тиклем һағындым, уны күргем килә,-ти.

-Мелани ике аҙна элек үлде, ул лейкемия менән ауырый ине, - ти ҡайғылы әсә күҙ йәштәрен тыя алмай. - Моғайын ауырыу булыуын һиңә белгертмәгәндер.

Джейндың үткер бысаҡ ҡаҙалғандай ҡапыл йөрәге сәнсеп, күҙ алдары ҡараңғыланып китә. Ул йығылмаҫ өсөн ишек яңағына һөйәлә...

- Мелани ошо пляжды яратты, шуға бында күсеп килдек, - ти әсәһе йәш аралаш. - Бында һаулығы бер аҙ яҡшырғандай булды, һуңғы ваҡытта үҙен бик бәхетле тойҙо. Тик бер көндө һаулығы ҡапыл насарайҙы... Үлер алдынан һеҙгә бер әйбер биреүемде үтенде... Хәҙер килтерәм.

Әсә кеше Джейнға тышына "Дуҫым өсөн" тип яҙылған конверт тоттора. Конверттың эсендә Меланиҙың сағыу төҫтәргә буяп сикһеҙ киң зәңгәр диңгеҙ, һары ҡом һәм ҙур ҡарлуғас төшөрөлгән һүрәте була. Һүрәттең аҫтына ул: "Ҡарлуғастар шатлыҡ килтерә" тип яҙып ҡуйған. Уны уҡығас, Джейн, үкһеп, ҡыҙҙың әсәһен ҡосаҡлай һәм улар туҡтай алмай оҙаҡ илайҙар...

**Кескәй ҡыҙҙың был һүрәте әле лә уның яҙыу өҫтәле тапҡырында эленеп тора. Джейн уны был тормоштоң һәр миҙгеленә шатланып, рәхмәтле булып йәшәргә өйрәткән кескәй дуҫының иҫтәлеге итеп һаҡлай.**

*Кеше бер аҙ алдашырға ла тейеш. Гел генә дөрөҫтө һөйләгәндә, бар донъя емерелә башлай. Кеше мөнәсәбәттәре нескә гөлгә окшаш. Уларҙы күләгәлә лә тотоп алыу кәрәк, юкһа, шиңә башларҙар.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# Иңдәремдә ике ҡанатым-

## думбыра һәм уҡытыусылыҡ

**Оркестр залына барып ингәндә республика конкурстары лауреаты Гүзәл Үмәрғалина думбыраһын сиртеп ултыра ине. Репетицияға бер-ике сәғәткә алдан килеп, шулай мауығып үҙ эше менән булыуы һоҡланыу тойғоһо уятты. Гүзәлдең уңғанлығына, өлгөрлөгөнә, яуаплылыҡ тойғоһона һоҡланмау ҙа мөмкин түгел: БР Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрындағы төп эшенән тыш, ул Өфө дәүләт сәнғәт училищеһында, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында дәрестәр бирә, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһында түңәрәк алып бара, өҫтәүенә, Башҡорт дәүләт филармонияһының музыкаль-әҙәби лекторийы концерттарында ла әүҙем ҡатнаша.**



Гүзәл бәләкәй саҡтан йә артист, йә уҡытыусы булыу теләге менән янһа ла, бер ваҡытта ла музыкант булырмын тип уйламай. Етмәһә, думбырасы! Тыуған Ишембай районы Биксән ауыл мәктәбенең туғыҙынсы синыфын тамамлағас, музыка уҡытыусыһы Әнүәр Ниғмәтуллин "Өфө сәнғәт училищеһында думбыра класына уҡыусылар йыялар", тигән хәбәр әйтә һәм теләктәре булғандарға үҙҙәрен һынап ҡарарға тәҡдим итә. "Думбыра нимә була ул?" тип һорай ҡыҙыҡһыныусан Гүзәл. Уҡытыусыһы аңлатып биргәс, башҡорт халыҡ йыр-моңон бәләкәй саҡтан күңеленә һеңдереп үҫкән, үҙе лә йырларға яратҡан ҡыҙ, мандолинала бер нисә көй ҙә уйнай белгәс, артыҡ күп уйлап тормай, ҡарар итә.

Әлбиттә, тыуған ауылынан, ата-әсәһенән айырылып китеүе, таныш булмаған музыка ҡоралына өйрәнеп, уны үҙенә буйһондороу йәш ҡыҙға еңелдән булмай. Бик күп тырышлыҡтар, ныҡышмалыҡ аша килә ул был уңышҡа. Маҡсатына тоғролоҡ, яуаплылыҡ тойғоһо, намыҫ, яҡындарының өмөтөн аҡлау тигән изге төшөнсәләр уға башлаған эшен атҡарып сығырға ярҙам итә. Училищеның тамамлағас, Гүзәл З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында уҡыуын дауам итә. 3-4 курстарҙа уҡығанда уҡ Гүзәл Үмәрғалина төрлө концерттарҙа ҡатнаша башлай. Профессиональ белем алғас, тәүҙә Башҡорт дәүләт филармонияһының музыкаль-әҙәби лекторийында, унан Башҡортостан Республикаһының Халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрында эшләй башлай.

Лекторийҙа эшләү, танылған "Йәдкәр" фольклор ансамбле менән Төркиә, Әзербайджан илдәренә, филармонияның ижад төркөмдәре составында Австрияға, Ырымбур, Пермь өлкәләренә, Мәскәү ҡалаһында, ә инде оркестр менән Башҡортостаныбыҙҙың бик күп ҡала һәм райондарында сығыш яһау һәләтле музыкантты үҫтерә, ҡанатландыра, ҡыйыулыҡ, үҙ-үҙенә ышаныс кеүек сифаттар тәрбиәләй.

- Музыкант тәү сиратта үҙенә талапсан булырға тейеш. Музыка ҡоралында көнөнә иң кәмендә 3-4 сәғәт уйнап алыу, үҙ өҫтөңдә эшләү фарыҙ. Унан һуң, күңел һалып уйнау өсөн музыканы аңларға, тыңлай белергә, яратырға ла тейешһең, - тип иҫәпләй Г. Үмәрғалина.

- Йәнәшәңдәге ниндәй таланттарҙан өлгө, фәһем алаһың? - тип һорайым Гүзәлдән.

- Филармонияла билдәле йырсы Тәнзилә Үҙәнбаева, атаҡлы ҡурайсылар Азат Айытҡолов, Рәмил Ғәйзуллин, мәшһүр баянсы Редик Фәсхетдинов менән бергә эшләү, бер сәхнәлә сығыш яһау минең өсөн оло тәжрибә мәктәбе үтеү ул. Шулай уҡ Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһында оло талант эйәһе Рәшиҙә апай Туйсина менән бергә түңәрәк алып барыу ҙа миңә күпте бирә.

Башҡорт думбыраһы халҡыбыҙҙың милли уйын ҡоралы булараҡ яңы тергеҙелә генә әле. Уны уйнай белеүселәр ҙә республикала бармаҡ менән һынарлыҡ. Шулар араһында хәҙер инде тамашасы танып, баһалап өлгөргән Гүзәл Үмәрғәлина ла бар. Ул халҡыбыҙҙың боронғо моңон башҡорт думбыраһы ҡылдарында сиртеп, күңелдәргә еткерә белә. Айырыуса "Игзаков", "Сыңрау торна", "Бала ҡарға" ҡобайырҙарын яратып башҡара. Республикабыҙҙың сәнғәт училищеларында думбыра кластары асылыуы, мәктәптәрҙә түңәрәктәр ойошторолоуы уны сикһеҙ һөйөндөрә. Үҙе әле 14 думбырасы әҙерләй, шуларҙың дүртәүһе быйыл уҡыу йортон тамамлай ҙа инде.

Гүзәл әле бик йәш булыуға ҡарамаҫтан, хәстәрлекле остаз, уҡытыусы ла. Бала саҡта юҡҡа ғына уҡытыусы булырға хыялланмаған икән, уҡытыусылыҡ һәләте лә ҡандан килә шул. Гүзәл уҡыусыларына милли музыка ҡоралында уйнау серҙәрен генә төшөндөрөп ҡалмай, тормошта юғалып ҡалмаҫҡа, ҡыйыу, тырыш булырға ла өйрәтә. "Талантҡа тырышлыҡ һәм теләк ҡушҡанда, барыһы ла килеп сыға", - тип дәртләндерә уҡыусыларын Гүзәл Үмәрғалина.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**




### Ҡуллама

Ҙур киҫәк итте тураҡламайынса бөтөн килеш (1 килограмм) 1,5 литр һыуҙа талғын утта бешерергә. Ит тәмле булһын өсөн башлы һуған, кишер һәм аҡтамыр ҡушырға кәрәк. Бешкәс, һурпаһын яртылаш һарҡытып, итте һыуыт, арҡырыға теленгән киҫәктәрҙе һурпаһында тағы бер аҙ ҡайнатып ал. Ҡамыр йәйеп киптер һәм уны һалманан ҙурыраҡ итеп шаҡмаҡлап тура шунан һурпала ҡайнат. Бешкәс, һалманы майларға кәрәк. Тәрилкәгә дүртәр киҫәк ит, һалма, уртаға теленгән кишер һалып, өҫтөнә тоҙлоҡло һурпа ҡойорға һәм һурпаһына ваҡлап туралған сей һуған өҫтәп табынға ҡуйырға.

### Ҡыҫтыбый

Бер семтем тоҙ ҡушып һөткә баҫылған ҡамырҙы ҡоймаҡ кеүек йәйеп, майһыҙ табала бешерергә. Һөттә бешерелгән тары бутҡаһын йәймәнең ярты яғына һылап йәбештергәс, өҫтөнә иретелгән аҡ май һылап, табынға ҡуйырға. Ҡыҫтыбыйҙы һуған, ҡабаҡ, кәбеҫтә, тары бутҡаһы ҡушып иҙелгән картуфтан да бешерергә мөмкин.



АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Тарихыңды онотма,

## уның ҡабатланыуы бар

Кеше бер аҙ алдашырға ла тейеш. Гел генә дөрөҫтө һөйләгәндә, бар донъя емерелә башлай. Кеше мөнәсәбәттәре нескә гөлгә окшаш. Уларҙы күләгәлә лә тотоп алыу кәрәк, юкһа, шиңә башларҙар.

**(П. Таранов).**

Юлий Цезарь үҙ һалдаттарын шулай тикшергән: ҡурҡыныс тыуғанда һалдаттың йөҙө ниндәй төҫкә инеүенә иғтибар иткән. Ул ҡыҙарһа, тимәк, - батыр, ағарһа, тимәк, - ҡурҡаҡ, тип баһалаған.

Ҡасандыр Вольтерҙан һорай ҡуйғандар: "Үлгәс, ҡайҙа булырға теләр инең - ожмахтамы, әллә тамуҡтамы?" "Ожмахта климат һәйбәт, әлбиттә, әммә тамуҡта компания шәп", тип яуап биргән яҙыусы.

Китапты яҙылған кеүек үк аҡрынлап уҡырға кәрәк.

**(Аҡыллы берәүҙең әйткәне).**

Әгәр ҙә дуҫың һине ниндәйҙер етешһеҙлектә ғәйепләй икән, уйла: ул әле барыһын да әйтеп бөтмәгән.

**(Т. Фуллер).**

Юл ни дәрәжәлә насар булған һайын, шул ҡәҙәре кимәлдә күҙгә туҙан осора.

**(Михаил Генин).**

Бөтөнләй өмөтһөҙ эшкә тотонғанда уңыш йылмайыусан була.

**(Г. Флобер).**

Ваҡытында булған һәр нәмә файҙалы. Ваҡытында булмағаны йә һуңлағаны - башыңа төшкән ауырыу ғына.

**(У. Шекспир).**

Ниңә беҙ ахмаҡлыҡты насар нәмә тип уйлайбыҙ? Әгәр ҙә кешелек тыуҙырған ахмаҡлыҡтарҙы ла быуаттар буйы аҡылды әрләгән йә маҡтаған һымаҡ уҡ әрләһәк һәм маҡтаһаҡ, тәрбиәләһәк, ҡиммәте сикһеҙ берәй нәмә килеп сығыр ине.

**(Е. Замятин).**

Тауҙы - ел, кешеләр дуҫлығын һүҙ емерә..

**(Билдәһеҙ автор).**

Йыш ҡына "Теләйем, әммә булдыра алмайым", тиҙәр. Әммә быны хәҡиҡәте икенсе: "Булдыра алмайым, сөнки теләмәйем".

**(Билдәһеҙ автор).**

Тарихты онотҡан халыҡ уның ҡабатланыуына дусар ителә..

**(Сантаяна).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Аҫыл затлы аттарҙы берҙән-бер шатлығы тип иҫәпләгән бер король йәшәгән. Ул аттарҙы уға гел генә ҡартайып барған ат ҡараусыһы һайлай торған булған. Ҡарт ат ҡараусы бер саҡ королгә йәш егетте алып килгән һәм: "Мин оҙаҡламай үлермен инде, бына үҙемә алмаш алып килдем",- тигән. "Ярай, - тигән король, тик беҙ уны тәүҙә һынап ҡарайыҡ: көтөүҙән иң шәп ерән саптарҙы һайлаһын". Йәш кеше көтөүҙән үҙенә оҡшаған атты һайлап алып килгәс, король асыуланып киткән: " Был ниндәй ерән саптар булһын?". "Асыуланма, батшам, - тигән ҡарт ат ҡараусы. - Аттың төҫөн әле ул ысынлап та бик айыра белмәй. Ләкин ул көтөүҙәге иң шәп атты һайлаған. Егет, тимәк, "шәп" тигәндең асылын күрә белә. Ал һин уны эшкә".**

**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәрририәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТҠУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныклығы №7 –1675.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, 2**53-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 2**53-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6000
Заказ 2054